# ИШЕМБАЙ

Матур йәй көндәренең береһе ине. Өс ат егелгән яҡшы фаетон, геолог Никольский һәм уның ҡатыны Елена Михайловнаны ултыртып, Стәрлетамаҡ ҡалаһынан көньяҡҡа, Оренбургҡа ҡарай оло юлға сыҡты. Өфөнән Стәрлегә улар үҙҙәренең кескәй һәм күбәләк кеүек еңел генә «Форд» автомобилдәрендә килгәйнеләр. Ләкин Стәрлетамаҡтан башлап Елена Михайловна фаетонда барырға тәҡдим итте.

— Автомобиль ялҡытты инде, Мишель, минең яйлап ҡына, тәбиғәттән ләззәтләнеп фаетонда барғым килә. Мин Башҡортостандың атаҡлы матурлығын күрергә теләйем, Мишель. Их, яратам үҙеңде!

Был һуңғы һүҙҙәр Елена Михайловна тарафынан капризлы йылмайыу менән әйтелделәр. Геолог үҙе лә ҡатынына йылмайып ҡараны.

Геолог фаетонда барыу тураһында ҡатынының тәҡдименә ҡаршы килмәне. Ҡасан һуң уның ҡатынының теләктәренә ҡаршылыҡ күрһәткәне бар? Ул күптән түгел генә өйләнгән. Ярата ла Еленаны! Шуға күрә Никольский Мәскәүҙән Башҡортостанға килергә булғас, Елена Михайловнаны Мәскәүҙә ҡалдырмай үҙе менән йөрөтөргә булды. Еленаның атаһы ҡарт генерал да быға шатланды. Ҡыҙының яҡшы кейәүгә барыуына, уларҙың яратышыуҙарына шатланып бөтә алмай генерал. Шуның өҫтөнә Никольскийҙың һуңғы тапҡыр Башҡортостанға сәйәхәте генералды икенсе бер яғы менән ҡыҙыҡһындыра. Ул үҙенең кейәүе геолог Никольский менән был турала ныҡ һөйләште: әгәр ҙә Стәрлетамаҡ эргәһендә нефть ятҡылыҡтары табылһа, Никольский был турала яҡшы билдәләр тапһа, ул был ятҡылыҡ тураһында тулы һәм дөрөҫ мәғлүмәттәрҙе, генералға ғына әйтеп, геология комитеттарынан һәм фәндәр академияһынан йәшереп ҡалырға тейеш буласаҡ. Генерал менән Никольский икәүһе бергәләп Стәрлетамаҡ нефть ятҡылыҡтарын эксплуатацияларға тотонасаҡтар...

Геолог Никольский, фән кешеһе булһа ла, бай нефть сығыу урындары табылһа, үҙе шул урындың хужаһы булыуҙан баш тартасаҡ түгел ине. Туға

күрә, ҡайным генерал менән һөйләшкәндә: «Һеҙҙең компаньон булырға мин бик шат булыр инем, генерал!..» — тине.

Генерал, өрөп тултырған тауыҡ һымаҡ йыуан һәм ҡабарып торған бармаҡтары менән оҙон һәм ҡылған кеүек сикә һаҡалдарын (бакенбарды) һыйпаштырып, Никольскийға йылмайып ҡараны:

–Новелдең ояты юҡ, кейәү, Апшеронға ғына туймаҫ, һиҙеп ҡалһа, шайтан ояһына китер. Беҙҙе лә йүкәнән эшләмәгәндәр бит, крәҫтиәндәр әйткәндәй, беҙ капиталист булырға теләмәйбеҙме ни, ә? Ха-ха-ха!..

– Әлбиттә, генерал...

Никольский шул турала уйлай. Ул Кавказдың нефть ятҡылыҡтарын, Апшерон ярым утрауында Баку промыслаларын, ундағы көслө фонтандарҙы хәтерләй. Элгәре Өфө губернаһында нефть билдәләре тураһында геологтар араһында һүҙ күп йөрөһә лә, Никольский былдай һүҙҙәргә бик шикләнеп ҡарай. Шул уҡ ваҡытта әгәр ҙә ошо урындарҙа уның, геолог Никольскийҙың, инициативаһы менән нефть ятҡылығы табыла ҡалһа, ниндәй ҙур бәхет буласағын, бәлки ҙур промыслаларға хужа буласағын уйлап, Никольский төрлө хыялдарға сума. Ул бына ошо борғоланып аҡҡан Ағиҙел буйҙарында, ана ул матур булып күккә күтәрелеп тора торған «Шихан тау» итәктәрендә йөҙәрләгән вышкаларҙы, ул вышкаларҙа туҙғыған сәсле көслө фонтандарҙы күҙ алдына килтерә. Әгәр ҙә уның эше яҡшы һөҙөмтәле барып сыҡһа, фәндәр академияһында абруйы күтәреләсәген, бәлки академик итеп ҡабул итәсәктәрен уйлап, Никольскийҙың йөҙөндә әле борсолоу, әле бик ныҡ шатлыҡ билдәләре бер-береһен алмаштыралар.

Йомшаҡ фаетон талғын ғына тирбәтә. Матур һәм һимеҙ аттар тигеҙ генә таш юлдан бер көйгә юрта бирәләр. Ҡаршыла иртә йәйҙең ҡояшы йылы һәм һөйкөмлө итеп йылмая. Талғын ғына йылы ел иҫә.

Ә Елена Михайловна бер туҡтауһыҙ һөйләй ҙә һөйләй. Уның нескә генә, ваҡ ҡына көмөш ҡыңғырауҙар шылтыраған кеүек тауышы өҙлөкһөҙ яңғырап тора:

— Ай, Мишель, бында башҡорттарҙың теге романтический тирмәләре бер ҙә күренмәй бит! Ниңә улар юҡ бында? Мин ужасно шул башҡорттарҙы күрергә теләйем. Беләһеңме, теге легендарный Салауат менән Пугачев тураһында миңә Лиза ханым һөйләгәйне... Башҡорттар ҡымыҙ тигән бер шыйыҡ нәмә әсәләр икән. Ниндәйҙер хайуандың һөтөнән эшләйҙәр икән, ти. Башҡорттарҙың яратып эскән араҡылары икән... Мин шуны эсеп ҡарайыммы, Мишель йәнем, ә? Һин ниңә өндәшмәйһең, Мишель? Һин һаман шул үҙеңдең геологияң тураһында уйлайһыңдыр әле, дөрөҫмө?

Елена Михайловна, мөләйем йылмайып, түбәндән юғарыға табан иренең йөҙөнә, күҙҙәренә ҡарай, унының ҙур һәм йылы ҡабырғаһына тағы ла нығыраҡ ҡыҫыла төшә...

Стәрлетамаҡ — Оренбург юлында ике яҡлап ҙур ҡайын ағастары үҙҙәренең бөҙрә баштары менән йәшәреп ултыралар. Ҡайһы бер урындарҙа был ағастар шундай тигеҙ, бер сама йыш итеп ултыртылғандар — уларҙың ҡуйы япраҡтары юлды, ике яҡтағы яландарҙан айырып, күләгәләп ултыралар. Әйтерһең: был таш түшәлгән тигеҙ оло юл — үҙенә, ә ағастарҙан ситтә ике яҡлап яландар, баҫыуҙар — үҙенә бер донъя.

Оло юл буйлап йыш ҡына төрлө юлсылар үтәләр. Ҙур, бейек кырандастарға тығыҙ итеп ҡыҙыл мал тейәгән, ҡыҙғылт һәм шат йөҙлө сауҙагәрҙәр осрайҙар. Сауҙагәрҙәрҙең ҡушарлап, йәки өсәрләп еккән аттары ла үҙҙәре кеүек һимеҙ, һалмаҡ киң аҙымлы булалар. Улар, үтеп барышлай, Никольскийға юл бирәләр һәм рустар булһа — фуражкаларын, татарҙары, ҡырма йәки бохар бүректәрен һалып, һүҙһеҙ генә сәләмләшеп китәләр.

Бер урында Себер яғына оҙатыла торған арестанттар осраны. Егермеләп арестантты дүртәрләп теҙгәндәр ҙә, ике яҡлап бер нисә конвой һәм артта ат өҫтөндә бер яҡҡараҡ ҡыйшайтып кейелгән фуражка аҫтынан оҙон сәстәре сығып торған, ябыҡ ҡына йөҙлө офицер бара.

Яланбаш, яланаяҡлы, өҫтәренә халат кейгән арестанттарҙың аҙымдары сиктән тыш аҡрын. Ҡайһы берҙәренең аяҡтары юлдағы таштарға

бәрелеп ярғыланған һәм ҡан тамсылары юлдың эҫе саңына һуғарылып ҡалалар.

Никольскийҙың ямщигы арестанттарға юл биреп ситкә сыҡты. Геологтың фуражкаһын күргән офицер, уң ҡулының ике генә бармағын фуражкаһына тейҙереп, алыҫтан уҡ уға честь бирҙе. Геолог та фуражкаһын күтәреп ҡуйҙы.

Иң алғы рәттә килгән арестанттарҙың береһе, Елена Михайловнаға ҡарап, аҙымдарын тағы ла аҡрынайта төштө. Елена Михайловна ла ирекһеҙҙән күҙҙәрен уға төшөрҙө. Ләкин ул арестанттың саң ҡаплаған битендә ағарып күренгән тештәре һәм үтә текләп ҡарай торған ҡара күҙҙәренән башҡа билдәләй алырлыҡ нәмә күренмәне. Елена Михайловна тиҙ генә үҙенең күҙҙәрен ситкә алды. Шулай ҙа күңеленән генә «матур арестант икән» тип уйланы. Теге арестант эргәһендә барған стражник, аҙымдарын аҡрынайтҡан өсөн, уның эргәһенә ук килеп, асыулы тауыш менән:

— Әйҙә, әйҙә, атла! — тине һәм арттағы стражниктар ҙа үҙҙәренең тауыштарын сығарырға кәрәк таптылар:

– Атлағыҙ!

– Атрҡа ҡалмаҫҡа!

Арестанттар артынан юлда саң күтәрелеп ҡалды. Бер арестанттың бик эскеһе килә, күрәһең: — Һыу эсергә ине, иптәштәр, — тигән тауыш ишетелде. Уның был һүҙҙәрен стражниктың:

— Һөйләнмәҫкә! — тигән ҡарлыҡҡан, ләкин ҡалын һәм көслө тауышы ҡапланы.

— Ниндәй ҡатылыҡ, хоҙайым! Һыу эсергә лә рөхсәт итмәйҙәр... — тине Елена Михайловна. Никольский күберәк үҙенең уйҙарына яуап итеп:

— Былар политик һөргөнсөләр булырға кәрәк. Шулай итмәй булмай шул, — тине.

Геолог Никольский Ағиҙелдең һул яғындағы туғайҙа, Бурансы ауылы ҡаршыһына туҡтап, палатка ҡорҙо һәм яҡын тирәләге ауылдарҙың

береһенән алып килгән башҡорт старшинаһы ярҙамы менән разведка эшенә тотондо. Старшина Төлкөбай шурфта эшләү өсөн яҡын ауылдан биш башҡорт крәҫтиәнен килтерҙе. Никольский, Ағиҙелдән алыҫ түгел бер урында, ерҙе ҡаҙыта башланы.

Төлкөбай старшина геолог, бигерәк тә, Елена Михайловна өсөн күңелле кеше булып сыҡты. Уның түңәрәк кенә һаҡаллы ҡыҙғылт йөҙө, матур ғына ҡара ҡаштар аҫтында ҡыҫылып уйнап торған күҙҙәре менән һәр ваҡыт йылмайып тора ине. Рус телен боҙоп һөйләһә лә, ул тайшанып тормай — тиҙ-тиҙ генә һөйләгән көйгә ҡулдарын болғай, күҙҙәрен уйната. Уның йөҙө һәм күҙҙәре генә түгел, бөтә тәне, бөтә хәрәкәте йылмайған кеүек тойола.

Төлкөбай быға тиклем күп геологтарға, разведчиктарға һөйләгән һүҙҙәрен Никольскийға ла һөйләй:

— Беҙҙең башҡорт халҡы, ваше благородие, тихий народ. Бариндарҙың ошолай килгеләп йөрөгәндәрен яраталар, һеҙ килһәгеҙ, аҙ булһа ла заработка ла була... Бына мин 1905 йылдан башлап һеҙҙең ваше благородиеларға ярҙам итеп киләм... Беҙҙең бында кәрәсин обязательно булырға тейеш. Ана күрәһегеҙме Иҙелдең аръяғындағы тәрән соҡорҙо? Ана шундағы шишмә һыуы менән бергә кәрәсин, һеҙҙеңсә әйткәндә, гудрун һарҡып тора... Ундай ҙур эште, конечно, беҙ үҙебеҙ башҡара алмайбыҙ, ҡара халыҡ бит беҙ, барин, һеҙгә генә инде өмөт менән ҡарап торабыҙ...

Никольский уны иғтибар менән тыңлаған кеүек тойола, ләкин ул башҡорт халҡының «тихий» (тыныс) булыуы тураһында икенсе төрлө уйлай:

«Беҙ яҡшы беләбеҙ башҡорттарҙың тыныслығын. Ваҡытында императрицаны ярайһы ғына тынысһыҙландырҙылар улар...»

Никольский был уйҙарын ҡысҡырып әйтмәй. Беренсе шурфтың өс көн буйына инде ҡаҙылып та, 10 метр тәрәнлектә һис бер төрлө нефть билдәһе булмауы тураһында бошона.

— Иртәгәнән ана шул соҡорҙо ҡаҙый башларға кәрәк,— ти ул.

Никольскийға күңелле булмаһа ла, Елена Михайловнаға Төлкөбай менән күңелле тойола. Төлкөбайҙан ул һорашмаған нәмәһен ҡалдырмай. Мәскәүҙә бары инженерҙар, офицерҙар һәм башҡа шундай юғары ҡатлам халыҡтар араһында көн дә бер төрлө генә йөҙәткес тормошта йәшәгән генерал ҡыҙы Елена Михайловна өсөн Ағиҙел буйҙарының тәбиғәте лә, кешеләре лә, ят һәм яңы булғанға — ҡыҙыҡ күренә.

Өҫтәүенә, һуңғы ваҡытта Никольский, һәр ваҡыт тип әйтерлек үҙенең разведка эштәренә бирелеп, Елена Михайловнаға ваҡыт та бүлә алмай. Геолог көндәр буйы Ағиҙел буйлап эҙләнеп йөрөй. Ә ҡатыны күңелһеҙләнә. Уның эсе боша башлай.

Бер көндө Елена Михайловна бик ялынып һорағас, Төлкөбай уны үҙ өйөнә ҡымыҙ эсергә алып китте. Никольский ҡатынының был ҡыланышы һәм уның буласаҡ һөҙөмтәһе тураһында уйлап та торманы.

— Эсе боша торғандыр. Күңел асып ҡайтһын әйҙә,— тип уйланы ул.

Төлкөбай ҙур ҡунаҡҡа ҡымыҙҙың яҡшыһын, йыуасаның әйбәтен ҡуйҙы. Ҡунаҡ ҡатын тәүҙә ҡымыҙҙы ауырһынып эсһә лә, Төлкөбайҙың йылмайыулы, иркәләүсән һүҙҙәре аҫтында күп кенә эсте. Елена Михайловна Төлкөбайҙың ҡурайҙа уйнауын яратты һәм аҙаҡтан:

— Был музыкаң матур икән, господин старшина. Ҡымыҙыңды ла ал, әйҙә Ағиҙел буйына барып уйна әле. Унда һандуғастар һайрай... Кире ҡаҡмаҫһығыҙҙыр бит? — тине.

Яҡшы ҡымыҙ менән, аҙ ғына иҫереп алған Елена Михайловнаның күҙҙәре ниндәйҙер ят төҫ менән йылтырайҙар ине. Төлкөбайҙың ике бисәһе лә, уларҙы оҙатҡанда, асыулы күҙҙәр менән ҡарап ҡалдылар. Ләкин бер һүҙ ҙә әйтмәнеләр.

Ағиҙел буйындағы бейек яр башында үләндәр араһында Елена Михайловна ҡурай тауышы, һандуғастар һайрауы аҫтында, тағы ла иҫерҙе һәм ҡысҡырып көлөргә, йырларға, шаярырға тотондо.

Ул бейек яр башына барып баҫты ла, Төлкөбайға ҡарап:

— Господин старшина, мин һыуға төшәм, тотоғоҙ мине,— тип ҡысҡырҙы. Төлкөбай ҡурайын ташлап тиҙ генә геолог ҡатынының биленән тотто. Елена Михайловна үҙенең яланғас ап-аҡ беләктәре менән старшинаның муйынын уратып алды, һәм, бейек күкрәктәре менән старшинаның күкрәгенә ятып, улар үлән араһына йығылдылар...

Берәр аҙналап ваҡыт төрлө урындарҙы соҡотоп йөрөгәндән һуң геолог Никольский Мәскәүгә ҡыҫҡа ғына докладной записка яҙҙы: «Өфө губернаһының Стәрлетамаҡ тирәһендә, был ҡаланан көньяҡҡа ҡарай 20 километр урында, гудрун һарҡып ятҡан урындар бар. Мин соҡоп ҡараған ҡайһы бер шахталарҙа ла асфальт сыҡҡыланы. Ләкин промышленносҡа әһәмиәтле күләмдә нефть табыу эше бында өмөтлө түгел. Бында нефть бар тигән ҡараш ташлаған геологтарҙың оптимислыҡтарына мин бер аңлашылмау ғына тип ҡарайым.» Ә үҙенең көндәлегенә Никольский бөтөнләй икенсе төрлө яҙҙы:

«10 июнь, бөгөн һуңғы тапҡыр Бурансы эргәһендәге гудрун сығыштарын өйрәндем. 6 сажин тәрәнлектә икенсе тапҡыр асфальт ҡатламы осраны. Тәрәнгә киткән һайын асфальт йомшара бара һәм нефть тамсылары осрай.

Бөтә билдәләр бында нефть булыуында шик ҡалдырмайҙар. Тәрән скважиналар һалырға кәрәк. Күп кенә капитал түгеп эшләгәндә, яҡшы һөҙөмтә сығарырға мөмкин булыр ине. Ләкин... Һуғыш башланырға тороу сәбәпле, генерал Мәскәүгә саҡырып яҙған. Бер аяғы ҡәберҙә торған көйгә һуғышҡа китергә әҙерләнә. Миңә ул интендантствола эшләргә ҡуша. Ҡарт сиктән тыш материалист. «Ғәҙәттә, аҡыллы кешеләр, һуғыш ваҡытында геология менән маташмайҙар, аҡса көрәйҙәр» тип яҙған. Ҡарт булһа ла дөрөҫ уйлай әле ул. Докладной запискала бында өмөт юҡ тип яҙҙым, бәлки, ғүмер булһа, тағы ла килергә тура килер. Тағы ла килгәндә инде господин Никольский кеҫәһенә капитал тейәп килер ҙә — Рәсәйҙә яңы промысла барлыҡҡа килтерер. Һеҙ бына Мәскәүҙә ултырған әфәнделәр минең

запискаға ҡарап ултырығыҙ әле. «Йәшәү көрәштән тора» тигән кемдер бераү...

«Шулай за настроение насар, һуғыш минең өсөн бер ҙә ваҡытлы түгел. Был Елена тағы ла башҡорт старшинаһы менән күп бутала башланы. Ҡатын-ҡыҙға ышанырға ярамай ул... Көнләшәһегеҙме ни, господин Никольский? Әй-әй-й!.. Бер бысраҡ башҡорттан ҡатынын көнләшеп ултырғанын белһәләр, статский советник геолог Никольский тураһында ни уйларҙар ине икән?..»

— Иртәгә бөтә эштәрҙе бөтөрөргә лә — китергә кәрәк. Арығанлыҡ һиҙелә.

Никольский старшина Төлкөбайҙы саҡырып:

— Бына һиңә, господин старшина, аҡса, эшселәрҙе ҡәнәғәтләндер. 50 һум үҙеңә. Ярҙамың өсөн рәхмәт,— тине һәм ҡатынына ҡараны. Елена Михайловна ауыҙ эсенән нәмәлер йырлап сәстәрен төҙәтә ине — ул иренә лә, Төлкөбайға ла ҡараманы. Төлкөбай сығып китте.

Улар китергә тип йыйынып бөткәс кенә, Никольскийҙың алдына, 30—40 йәштәрҙә булыр, бер оҙон буйлы, ябыҡ йөҙлө башҡорт крәҫтиәне килеп баҫты. Рус телен һупалап, ул:

- Господин начальник, һеҙ беҙгә көнөнә 50 тин бирергә тигәйнегеҙ башта... Хәҙер 10 тин менән генә ҡалдырҙығыҙмы инде,– тине. Никольский күп һөйләшеп торорға теләмәне.

— Ниндәй ахмаҡлыҡ! Мин бит старшинаға бирҙем, уның менән һөйләшегеҙ, минең ваҡыт юҡ хәҙер.

— Ул бит унар тин генә бирҙе, господин .

— Марш бынан! Үҙегеҙ теләһәгеҙ нишләгеҙ, минең эшем юҡ!..

Бер аҙна буйына көнөн-төнөн белмәй тырышып эшләп йөрөгән биш крәҫтиән үҙ-ара оҙаҡ зарланышып торҙолар. Бынан бер нисә йыл элек бер йыуан ҡорһаҡлы урыҫ килеп эш хаҡын бөтөнләй түләмәй киткәйне. Ул саҡта эшләүселәр бай аҙығы ашап йөрөгәйнеләр. Хатта ҡайһы ваҡыт ул араҡы ла эсерә торғайны. Аҙаҡтан: «Һеҙ ашау хаҡын да сығара алманығыҙ»,

— тип бер тин дә аҡса түләмәне. Шуға күрә был юлы улар үҙҙәренән ашап йөрөгәйнеләр. Шулай ҙа тулы хаҡын ала алманылар.

Теге Никольскийға барып йөрөгән оҙон буйлы крәҫтиән Йәнбулат 18 йәшлек малайы Әхмәтгәрәй менән эшләгәйне. Улар икәүләп, үҙ ауылдарына ҡайтҡас, старшина Төлкөбайҙы осраттылар, Йәнбулат түҙә алманы, старшинаның ҡаршыһына баҫып:

— Төлкөбай замандаш, урыҫ һиңә тулы биргән бит аҡсаны,— тине,— ниңә инде былай обижать итәһең?.. Беҙ бит ни тиклем аҙапланып эшләнек. Ҡара тирҙәребеҙ аҡты...

Төлкөбайҙың йөҙөндә теге геологтар алдындағы кеүек йылмайыу, мөләйемлек билдәләренең әҫәре лә юҡ ине. Уның күҙҙәре уҫал уттар менән йылтырайҙар.

— Нәмә, һеҙ әле урыҫтың үҙенә барып йөрөнөгөҙмө? Миңә ышанмайһығыҙмы ни? Һин, Йәнбулат, ҡара! Арестанттар үткәнен күргәнең бармы? Аяҡтарың-ҡулдарың быҒаулап, һине лә Себергә оҙатырмын. Башыңды катрҙа серетермен... Аңланыңмы?

Һуғыш башланғас, ауылдан иң башлап һуғышҡа киткән кеше Йәнбулат булды. Старшина «шикле кеше» тип уны этап менән ҡалаға оҙатты — унан фронтҡа ебәрҙеләр...

«Һин үҙең, иптәш, кем һуң — крәҫтиән балаһымы, ярлымы, әллә ҡала кешеһеме тигәндәй? Уны шуға һораным, үҙ башынан үтмәһә, кеше хәлен кеше белмәй, тигәндәр. Шулай түгелме? Беҙҙең үткән ғүмерҙе әйтмә инде, ҡустым.

...Хәҙер бына былай рәхәтләнеп, асыҡтан-асыҡ һөйләшәбеҙ — теге ваҡытта улай булмай торғайны. Уйлап ҡара: тормош насар. Көнө-төнө эшләйһең, һаман да рәтләнеп булмай. Ҡайҙа ҡараһаң — унда талаш, ыҙғыш, зарланыу, үҙ-ара дошманлыҡ... минең атайым да ярлы крәҫтиән ине. Йәнбулат исемле кеше ине, бәлки ишеткәнегеҙ ҙә барҙыр. 14-се йылды уны иң тәүҙә тотоп (беҙҙә Төлкөбай тигән старшина бар ине) старшина һуғышҡа оҙатты. Этап менән ебәрҙеләр.

...Бер рус Мәскәүҙән килеп беҙҙең ерҙә, кәрәсин эҙләп, соҡоноп йөрөнө. Шул русҡа ер ҡаҙыу эшендә атайым менән беҙ ҙә эшләнек.

Йәйҙең йәмле ваҡыты ине. Атайым был йылды һал ағыҙырға ла бармай ҡалғайны. Шунан теге русҡа (Никольский тип йөрөтәләр ине) аҙна-ун көн эшләп йөрөнөк. Бик тырышып, ҡара тиребеҙҙе ағыҙып эшләнек.

— Әхмәтгәрәй улым,— ти торғайны атайым,— йәштән үк тырышып эшләргә өйрән, эшкә ялҡауланма. Беҙҙең ярлы кешегә ялҡау булһаң, ашарға кем бирер? Байҙарға байырға, беҙгә эшләргә ҡушҡан алла. Алланың ҡарашы беҙгә насар, байҙар менән генә дуҫ ул...— ти торғайны.

Шулай булды шул: әй эшләп йөрөгән булдыҡ теге русҡа, ә эш аҡсаһын барыбер тулы алып булманы. Беҙгә тейешле аҡсаны рус старшинаға биргән, ул беҙгә бирергә ҡушҡан,— көнөнә иллешәр тингә һөйләшкәйнек, — ә старшина унар тин генә бирҙе. Шунан атайым ҡарт уны осратып «ниңә аҡсаны тотоп ҡалдың» тигәйне, старшинаның асыуы килде. Унан элек тә шундай талаштары булғайны, страховой аҡсаһын түләмәгән өсөн беҙҙең самауырҙы, башҡа йорт нәмәләрен һаттырҙылар. Шунда ла атайым старшинаға бик ҡаты бәрелгәйне. Шунан ни Төлкөбай атайымды һуғышҡа оҙатты ла ҡуйҙы.

Һуғыш башланып, ике йыл үткәйне — үҙемде лә һалдатҡа алдылар. Өйҙә йәш балаһы менән ҡатыным да әсәйем генә ҡалғайнылар. Ҡатын мин ҡайтҡанды көтмәгән, бер аҡһаҡҡа тормошҡа сыҡҡан, әсәйем оҙаҡ та үтмәй үлгән...

Их күңелһеҙ ҙә инде үткән ваҡыттар, мин үткәндәрҙе бер ҙә хәтерләргә тырышмайым, уйлағы килмәй ул турала, уйлаһаң ҡыйын була...

Бына шулай, иптәш, ул ваҡытта беҙҙе эт урынына ла күрмәй торғайнылар...

Граждандар һуғышында 1921 йылға тиклем йөрөнөм мин. Шунда ике йыл рәттән Колчак фронтында ла, Врангелгә ҡаршы ла, Польша фронтында ла бер хохол егете менән бергә йөрөнөк. Таманчук фамилиялы ине. Һәйбәт егет ине. Һуңынан Польша фронтында үҙен снаряд саңға әйләндереп

ташланы. Тәненең бер генә урыны ла бөтөн көйгә ҡалмағайны. Атайым үлгәндә иламағанды, шул иптәш үлгәс, күҙ йәшем менән иланым — бик ҡыҙғаныс булды.

Ул егет Бакуҙағы нефть промыслаларынан ине. Нефть тураһында ла бик ҡыҙыҡ итеп һөйләй торғайны. Ул үҙе Бакуҙың Сурахан тигән урынында бурильщик булып эшләгән. Шунда тыуған, шунда үҫкән.

Шулай шул. Сурахан тигән ерҙә нефть ер аҫтынан бик ҙур фонтандар булып юғарыға ата, ти. Ҡайһы ваҡыт тәүлегенә утыҙар мең тонна нефть атыла, ти. Шул фонтандарҙың нефть ямғырҙары әллә нисә саҡрымға, хатта унар саҡрымға тиклем тирә-яҡҡа яуа, бөтә ҡаралтыларҙы нефткә мансып бөтә икән...

Мин уға үҙебеҙҙең яҡта Ишембай, Бурансы, Күҫәпҡол ауылдары тирәһендә нефть сығып ятҡан урындар тураһында һөйләй торғайным. Ул әйтә торғайны, Әхмәтгәрәй дуҫ, ти торғайны, бына һуғыш бөтһә, йылдарименгә китһә, совет власы һеҙгә лә беҙҙең Сурахандағы кеүек вышкалар һалыр әле. Беҙҙең Сурахандағы нефть быға тиклем капиталистарға файҙа килтерһә, һеҙҙәге промыслалар инде капиталистарҙы белмәҫтәр, ысын совет промыслалары булыр, әгәр нефть була ҡалһа. Ну бик тәрән быраулырға кәрәк шул. Бер нисә йөҙ метрҙар ҡаҙымай тороп, нефть сыҡмаҫ...

Бына шулай һөйләй торғайны ул егет. Шул ваҡыттан уҡ инде ул партияла тора ине. Мине лә бик димләне. Дурак булғас — инмәнем бит шунда партияға, крәҫтиәнде беҙҙең беләһегеҙ бит, йә тегене, йә быны уйлайһың, грамота ла юҡ, фәлән тигән булаһың. Хәҙер үкенеп бөтә алмайым шуға...

Ну ауылға ҡайтҡас инде, йорт эштәренә бирелеп киттем, һаман шул көйгә ҡала бирҙе.

Ҡана, бер тартып алайыҡ әле, иптәш, шулай… Беҙ колхозға утыҙынсы йылдың яҙында ойошҡайныҡ, ул йәйҙе бергәләп эшләнек. Ауылдың бик аҙ өлөшө генә колхозға ингәйне унда. Ул йылды ун биш кенә хужалыҡ эшләнек. Ауыл халҡы беҙҙән көлөп йөрөнө, йыйын ярлы-ябағай

йыйылғандар — ниндәй эш сығарырҙар икән, тиҙәр. Ну шулай ҙа мах бирмәнек, тырышып эшләһәң, эш була бит ул, шулай түгелме?

Бәхеткә ҡаршы, иген бик яҡшы уңды, бойҙай араһында аттың дуғаһы күренмәй торғайны.

Көҙ генә килеп еткәйне — тағы ла әлеге нефть тураһында килгәндәр, араларында бер мәрйә лә бар. Тик теге һуғыш башланған йылды килгән Никольский тигән рус мәрйәһе түгел инде. Ат менеп ала ла көнө-төнө, ямғырға ла, ниңә лә ҡарамай, Ағиҙел буйлап йөрөй. Ҡайһы бер урындарҙа бағаналар ҡағып, ниндәйҙер билдәләр яһап китә.

Оҙаҡламай Стәрлетамаҡ яғынан әллә ни тиклем подводалар, төрлө машиналар, бүрәнә, таҡталар ташый башланылар. Ул нәмәләрҙе Ишембай ауылы тирәһенә өйөп ташланылар. Кешеләре лә күбәйеп китте. Бер көндө Ишембайға барһам (Ишембайҙа шул көҙҙө генә Октябрь байрамында яңы ғына колхоз ойошҡайны), уларҙың идара кешеләре менән бер рус һөйләшеп ултыра.

— Беҙгә эшселәр кәрәк, бер нисә колхозсығыҙҙы бирегеҙ...— ти. Ишембай колхозының идараһында ул ваҡытта хәҙерге уҡытыусы Яҡупов менән Шаһидулла ағай ҡыҙы Һәжәр ултыралар ине. Ярар, шулай булды бит инде. Ишембайҙан Бәхтейәр ҡарт, минең замандаш Насырьян, тағы ла Фазыльян, Әхмәт Ишембаевтар — бер унлап кеше эшкә яҙылдылар.

Мин ауылға ҡайттым да, бер нисә кешене ҡотортоп, тегеләрҙең конторапарына киттек. Шул көндә үк беҙҙе лә алып ер ҡаҙыу эшенә ҡуштылар...

Шулай итеп, утыҙынсы йылдың ноябрь башында, мин Ишембай нефть разведкаһында эшләй башланым. Колхозды ташлауы күңелһеҙерәк булды булыуын, бер күңел һалып эшләй башлағас, ойошторғас— күңел тарта бит. Ярай әле оҙаҡламай бөтә ауыл халҡы колхозға инде. Таралмаһа ярар ине, тип тора инек...

Теге көҙ көнө ат менеп, тегендә лә, бында ла йөрөй торған мәрйә — геолог Варвара Ивановна Насал булып сыҡты. Ҡағып йөрөгән бағаналары —

буровойҙар һала торған урындар икән. Бына ошо урындарҙа беҙ буласаҡ буровойҙар өсөн шахталар, котловандар ҡаҙа башланыҡ...

...Ҡыштың, һалҡын көндәре лә килеп етте. Ағиҙел яланында бер ваҡытты бурандар ҡотора башланы. Бурандар туҡтаһа, яланды ҡаты һалҡын ҡатырып ала.

Иртәнсәк иртүк тороп, таң атҡанды ла көтмәйбеҙ — көрәктәр, кәйләләрҙе күтәреп эшкә китәбеҙ. Беҙҙең ауылдан шулай бер отряд, Ишембайҙан, Күҫәпҡолдан — эшсе отрядтар шау-гөр килеп бөтә яланды яңғыратабыҙ.

Эштең еңеле булмай инде унын, иптәш, шулай түгелме? Ауыр ваҡыт та була торғайны. Билдәле, 701, 703, 704-се буровойҙарҙы бер ваҡытты һала башланыҡ. Ишембаевтарҙың бер нисәһе, Ағиҙел ярын ҡырҡып, юл һалдылар.

Шулай, тирә-яҡта буран ҡотора, беҙ эшләйбеҙ. Ҡыҙып эшләгәндә һалҡын былай әллә ни һиҙелмәй. Лом менән эшләһәң, тирләтеп тә ебәрә. Тирә-яғыңда буран ҡоторамы, әллә аяҙ һауамы, һалҡынмы, ниме, бер нәмә лә белмәйһең. Йәш ваҡытта берәй ҡыҙҙы яратып йөрөһәң, ул да һине ратһа — шулай була: әллә нисек инде бик рәхәт, бик күңелле тойола. Иптәштәреңде лә яратаһың, уларҙың барыһы ла һиңә бер туғандар кеүек, шул яҡын кешеләр менән алыҫ юлға, ҡунаҡҡа барырға сыҡҡан кеүек тойола. Эште яратып эшләһәң, унын шундай рәхәте һиҙелә.

Ана шул 704-се буровой котловандарын ҡаҙғанда, беҙ алты кеше шулай эшләнек. Унда мин генә түгел, бөтә кеше шулай күңелле эшләне. Шаһиморат ҡарт бар ине шунда, ҡыҙып-ҡыҙып эшләгәндән һуң, бер ваҡытты туҡтап көрәгенә таяна ла бик һуҙып йырларға тотона.

Шаһиморат ҡарттың йыры йәйге ваҡыттарҙы, бесән сапҡан саҡтарҙы хәтергә төшөрә, әйтерһең, хәҙер ҡыш түгел, бурандар ҙа юҡ. Ҡояш ҡыҙҙыра. Тирә- яҡта оҙон-ҡуйы үләндәр, төрлө сәскәләр, һауала ҡоштар һайрай, ә Шаһиморат ҡарт йырлай. Ул йырлап бөткәс, беҙ ҡысҡырып ебәрәбеҙ:

— Һай-һай-һай-й-й-й! — тибеҙ...

Тик эштән аҙ ғына туҡтап торһаң, һалҡын тирә- яҡта ҡыш, йәй әле алыҫ икәнлеген һиҙҙерә башлай. Һалҡын танауҙы, бит алмаларын энә кеүек нәҙек кенә бармаҡтары менән тотҡолап ҡарай. Беҙ тағы ла ҡыҙып эшләргә тотонабыҙ.

Төш етә. Әгәр ашау өсөн өйгә ҡайтып йөрөһәң, әллә ни тиклем ваҡыт үтер ине. Шунда, эшләгән ерҙә котлован эсенә генә йыйылып ултырабыҙ ҙа яҡшы уҡ ҡына туңып өлгөргән икмәкте ашайбыҙ. Кискә тиклем тағы ла эшләйбеҙ.

Шулай итеп беҙ котловандар ҡаҙыйбыҙ, ә вышка эшләй торған балтасылар, ҡалын бүрәнәләр ҡуйып, вышканы эшләй баралар.

Шул ҡышты бер нисә ай эсендә дүрт буровой вышка һалынды, һалҡынға-нигә ҡарамай беҙ тырышып эшләйбеҙ, балтасылар ҙа беҙҙән ҡалышмаҫҡа тырышалар. Көн һайын вышка бейекләнә бара. Вышка башында, юғарыла, эшләүе бит котлован ҡаҙыу түгел инде. Балтасыларға ла һүҙ юҡ, бик тырыштылар. Бөтә ағас, тимер материалдар туңалар, бурандар вышкаларҙы юғарынан бәреп төшөрөргә тырышалар, Ә улар бирешмәйҙәр...

Шулай итеп, шул ҡышты яҙға ҡарай инде, беҙҙең яҡта ғүмер-ғүмергә булмаған гудоктар тауышы бөтә яланды яңғырата. «Бына нисек гөрләтәбеҙ донъяны»,— тип уйлайһың.

Мин бик күп һөйләнем булһа кәрәк. Тик газетаға-нигә яҙа ҡалһаң, минең фамилияны әйтмә инде, иптәш. Үҙе тураһында бик күп һөйләй икән тип уйларҙар. Маҡтаныу түгел бит. Беҙҙең халыҡ араһында ла ниндәй кешеләр юҡ? Ҡайһы берәүҙәр һәр ваҡыт зарланып йөрөүсән булалар. Эш ауыр имеш, эш хаҡы аҙ, ашарға етмәй, тиҙәр. Эштең еңеле булмай ул, шулай түгелме? Мин үҙем былай асыҡҡаным юҡ әле. Ҡайһы ваҡытта булғылаштыра ла бит, ваҡытлы ғына була. Шуға ҡарап нисек бузит итеп йөрөйһөң.

Мин шулай үткәндәр тураһында, үҙебеҙҙең турала һөйләргә яратам. Собраниеларҙа ла сығып һөйләштергеләйем. «Революцияға тиклем бынан да

насарыраҡ тора торғайныҡ, аслы-туҡлы тороуға ҡарамайынса, һиңә эт көнө лә күрһәтмәй торғайнылар. Байҙарға бер һүҙ әйтергә ярамай торғайны. Хәҙер уларҙың үңәстәренән алдыҡ. Тормош тотош үҙебеҙҙең ҡулда. Билдәле, бер тигәс тә, бөтәһе лә булмай ул, ә тырышып, ярышып эшләһәң, обязательно барыһы ла булыр» тип әйтәм дә — ҡайһы берәүҙәргә был оҡшамай. Төрлө кеше бар бит әле беҙҙең үҙебеҙҙең халыҡ араһында ла, үҙебеҙҙең ярлы халыҡ бер хәл ине ул, нәмә генә әйтмәһен, үҙебеҙҙең һуғышып алған власты теш-тырнағы менән яҡлар, шулай түгелме?

Ә, бына теге замандан ҡалған, беҙгә ят халыҡтар менән инде һаҡ булырға кәрәк. Бая Төлкөбай старшина тураһында әйткәйнем бит әле? Бына шул старшина малайы Ғәлләм Төлкөбаев та разведкаға эшкә инеп ҡалған. Бер көндәрҙе әле профсоюзға барып әйттем. «Шул старшина малайын ҡыуып сығарығыҙ, һарыҡ тиреһен ябынған бүре бит ул» тим. Үҙе былай харап йөрөй, ударник булып алған. Собраниеларҙа сығып һөйләй. Но профсоюз кешеләре минең һүҙгә иғтибар итмәйҙәр, уның атаһы күптән үлгән инде, революция ваҡытынан бирле атаһы тәрбиәһендә булмаған, ул хәҙер беҙҙең кеше булып киткән, тиҙәр, һин һулға бөгәһең, партизанлығыңа тартаһың, тиҙәр. Моғайын шул сволочь берәр насар эш эшләп ҡуйыр әле, бүре балаһын бүреккә һалһаң да, илекмәй инде ул...

Но ярай. Миңә вахтаға барырға ваҡыт етәлер инде, ингеләп йөрө шулай, иптәш, һөйләшеп ултырырға яратам мин үҙем, күңел бушап ҡалған кеүек була».

Улар Ишембайға 11 февралдә килделәр. Улар: 4 бурильщик, 4 токарь, 4 кочегар һәм шул 12 кешелек бригада башында буровой мастер коммунист Лебедев. Улар Бакуҙан килделәр һәм Ишембай нефть разведкаһының беренсе кешеләре булдылар.

Күбеһенсә Бакуҙың йылы һауаһына ғәҙәтләнгән нефтселәрҙе Башҡортостандың февраль айында була торған һалҡындары, әсе бурандары ҡаршыланылар. Шул бурандар, Ағиҙел буйҙарында ҡотороп бөгәрләнгән

ҡар өйөмдәре аша Ишембайҙың беренсе вышкаһы күренде. Был — һалына башлаған иң беренсе дүрт вышканың береһе — 703-сө вышка ине.

Мастер Лебедев үҙенең бригадаһы менән ана шул 703-сө буровойҙа эшләй башланы. Улар быға тиклем балтасылар тарафынан эшләнеп ҡуйылған буш вышкаға монтаж яһарға, уға «йән бирергә» тотондолар. Вышкаға монтаж яһау еңел эш түгел, бигерәк тә, төрлө инструменттар булмау, күҙ астырмай торған бурандар, өҫтәүенә, бындай ваҡытта иң кәрәкле кеше — слесарҙың булмауы шарттарында монтаж эштәре ауыр булды. Вышка эргәһенә килтереп ташланған пар машинаһын, барабанды, ротор һәм башҡа машиналарҙы бурандар ҡосағынан тартып алып, вышка эсенә алып инделәр һәм үҙ урындарына ултырта башланылар.

Машиналарҙың тимер тәндәре һалҡын менән һуғарылғандар. Улар, кешеләрҙе яҡын ебәрмәҫкә һүҙ бирешкән кеүек, бейәләйҙәр аша ҡулдарҙы өтәләр. Тотоп алырға тиһәң, шыуышып ҡулдан ысҡыналар.

Гайкаларҙы бororға асҡыстар һәм гайкалар үҙҙәре лә етешмәй. Буровой партия тынысһыҙлана, бурандарҙың, ҡыштың ата-әсәләрен һүгә, кешеләр үҙ-ара ла, ҡайһы ваҡыт бер ҙә юҡтан ғына ла, һүгешеп китәләр. Разведканың техноругы булып килгән инженер Присс үҙе слесарь урынына эшләй башлай. Бирелмәҫкә теләгән машиналарҙы үҙенең көслө ҡулдары менән эләктереп ала ла үҙ иркенә буйһондора, хатта бик кәрәк частарҙы үҙе яһап ҡуя. Коммунист инженерҙың был тырышлығы ҡалғандарҙы өмөтләндерә. Улар, ҡаршылыҡтар алға килеп баҫҡан һайын, тағы ла уҫалыраҡ, батырыраҡ эшләйҙәр.

Тәүлегенә 4—5 сәғәт кенә ял итеп, бер нисә көндәр эшләгәс, 15 февралдә Ишембай разведкаһының беренсе буровойын улар эшкә ҡуштылар. Алыҫтарҙан, бик алыҫтарҙан килгән ҙур тәжрибәле нефтселәргә урындағы кешеләр ҡушылдылар. Буровойҙа ябай эшселәр итеп башҡорт эшселәре алынды.

Беренсе буровойҙың кочегаркаһы ҡышҡы һауаға беренсе төтөндәрҙе ташланы, беренсе парҙар магистраль буйлап буровойҙың пар машинаһына

һуҙылдылар. Парҙар шауланы. Ротор әйләнә башланы. Ротор менән бергә квадрат һәм инструмент та әйләнде.

Ул ваҡытта Ишембайҙа яңы ғына ойошторола башлаған йәш, аҙ һанлы, ләкин революция эше өсөн юлда осраған бөтә ауырлыҡтарҙы еңеүгә әҙерлек теләге менән һуғарылған коммунистар ячейкаһы етәкселеге аҫтында ҙур, мөһим эшкә нигеҙ һалынды...

Инженер Присс алдында ҙур, яуаплы бурыс тора: бына был яңы ғына эшкә башлаған 703-сө буровой артынан тиҙ темптар менән, тағы ла өс буровойҙы эшкә ҡушырға кәрәк. Ҡалған өс буровой ҙа, яҙға уҡ инде, эшләй башларға тейеш.

Сөнки — бында, бына был яландарҙың аҫтында, хәҙергә әле билдәле булмаған ниндәйҙер тәрәнлектәге ҡалын ҡатламдарҙа нефть ята. Нефть барлығы тураһында күп билдәләр бар. Ишембай нефтен өйрәнгән күп кенә геологтарҙың фекерҙәре шундай. Геолог Блохин — авторитетлы кеше. Блохин бында нефть барлығы тураһында ҡыҙып-ҡыҙып ысын күңелдән һөйләй.

— Ләкин тәрән быраууларға, тәрән скважиналар һалырға кәрәк,— ти ул.

...Буровойға килеп инеү менән, буровиктар инженерға үҙҙәренең жалобаларын яуҙыралар:

— Пар етмәй, иптәш инженер...

— Ҡаҙан бик насар...

— Донканың рәте юҡ...

— Инструменттар йыш ватыла...

— Слесарь килтерергә кәрәк ине.

Инженер быларҙы үҙе лә күреп тора. Етешһеҙлектәр атлаған һайын күҙгә ташлана.

Тик уның ҡыҙғылт сырайлы түңәрәк йөҙө үҙенең һәр ваҡыттағы тыныслығын юғалтмай.

— Ярар, иптәштәр, табырға тырышырбыҙ, тик ҡулдан килерлек эште, пожалуйста, үҙегеҙ ҙә башҡарырға тырышығыҙ...

Ул үҙе һиҙеп тора: бындай һүҙҙәр менән скважина быраулап булмай. Быраулау өсөн яҡшы машиналар, инструменттар кәрәк... Шулай ҙа бына ошо ауыр шарттарҙа эш алып барыусы кешеләргә инженерҙың был һүҙҙәре йылы, яғымлы тойолалар. Инженер менән эшселәр араһында дуҫлыҡ, берҙәмлек хисе тыуа.

...Эштәге ауырлыҡтар ҡайһы ваҡыт инженерҙың уйҙары алдына бөтәһе бер юлы килеп баҫалар. Бындай ваҡытта инде был ауырлыҡтар шундай күп һәм еҥеп була алмаҫлыҡ тойолалар — инженер ҡаштарын йыйыра, нәмәгәлер асыуы килә, тик нәмәгә икәнен үҙе лә белмәй. Тирә-яҡта һалҡын, аҡ һәм эс бошорғос тынлыҡ. Ҡалын боҙҙар аҫтында ҡалған Ағиҙелдең һул яғында киҥ яландар, уҥ яғында, арыраҡ, көнсығышҡа ҡарайыраҡ тауҙар... Стәрлетамаҡҡа ҡарай айырым- айырым торған бейек тауҙар бар. Яландар ҙа, тауҙар ҙа ҡар япмаларына төрөнгәндәр ҙә, бөтә тирә-яҡҡа, бөтә барлыҡҡа һалҡын тынлыҡ менән ҡарайҙар... Әйтерһең, улар, бына был ялан, ғүмер-ғүмергә шулай аҡ һәм тын булып торасаҡ, әйтерһең, бында бер ваҡытта ла тормош, шау-шыу буласаҡ түгел. Бурандар шау-шыуы тормошмо ни ул? Ләкин инженерҙың бындай уйҙары оҙон ғүмерле булмайҙар. Бындай уйҙар күңелдең әллә ҡайһы ерендә генә, бер мөйөшөндә барлыҡҡа киләләр ҙә — юҡҡа сығалар, йылдар буйына үҙләштерелгән тәжрибә менән нығытылған белеме һәм большевиктар идеяһы уның уйҙарын иртәнге көнгә боралар. Инженерҙың аҙымдары шәбәйә, аяҡтары ныығыраҡ баҫалар. Уның аяҡтары аҫтында һалҡын ҡарҙар шаулабыраҡ тығырҙайҙар...

Башҡортостан партия ойошмаһы һәм хөкүмәте лә, Мәскәүҙә лә Ишембайға хәҙер ҙур өмөт менән ҡарайҙар.

Советтарҙың 13—14 февралдә булған 8 бөтә Башҡортостан съезының «шуның менән бергә Ишембай, Йүрүҙән һәм башҡа нефть ятҡылыҡтары урындарына разведка һәм быраулау эштәрен тиҙләтеүҙе ныҡ кәрәкле эш

тип табырға...» тигән ҡарарын инженер яҡшы белә. Шуның өҫтөнә Мәскәүҙең Үҙәк халыҡ хужалығы советы нефть секторының да Ишембайға ҡарата булған директивалары — әгәр ҙә бында нефть табыла ҡалһа, советтар иле өсөн уның тотасаҡ ҙур урыны — былар барыһы ла инженерҙың уйҙары, уның хәрәкәтен, көндәлек тормошон бына был яландарҙың аҫтында ятҡан «серҙе» асыуға, бына был эс бошорғос тынлыҡты емереүгә, нисек тә йәһәтерәк яңы буровойҙарҙы эшкә ҡушыу бурысына ҡарай йүнәлдереләләр...

Эй көндәре лә көндәре! Ҡарағыҙ әле, егеттәр, һабан турғайы һайрай бит. Үҙе күренмәй, үҙе һайрай...

— Ҡуй әле турғайын, бөгөн бит настоящий буровиктар булабыҙ, егеттәр — өйрәнеүе бик ҡыйын булмаҫмы икән...

— Донъяла кеше өйрәнмәгән эш буламы ни? Өйрәнербеҙ әле, барына ла өйрәнербеҙ — эш үҙе өйрәтә ул...

— Эш өйрәтә өйрәтеүен дә, кем менән эшләргә тура килә бит. Бында ҡырҡ ата балаһы йыйналған. Төрлө кеше бар. Бакуҙан, Грузиянан, Уралдан, тағы ла әллә ҡайҙарҙан йыйналған кешеләр араһында кем булмаҫ...

— Төрлөһө барҙыр барын да, шулай ҙа үҙебеҙҙең эшсе халыҡ бит. Революцияға тиклем килеп, беҙҙең менән һөйләшергә лә ерәнеп йөрөй торған Никольскийҙар, полковниктар юҡ бит хәҙер, егеттәр. Әхмәтгәрәй, дөрөҫмө, замандаш?

— Әлбиттә, сағыштырырлыҡ та түгел. Ул һуҡыр бер тиндәрҙең заманы үтте. Шаһиморат бабай, хәтереңдәме, теге ваҡытта Никольский менән Төлкөбай беҙҙе ярыҡ кәмәгә ултыртҡайнылар? Бөгөн мин эшкә рәхәтләнеп барам, егеттәр, покрайнемире үҙебеҙ хужа.

...Шулай түгелме?

...Биш-алты кешене тейәгән кәмәнең мороно Ағиҙелдең уң яғындағы бейек ярға килеп төртөлдө. Кәмәлә килеүселәр, кәмәне ярғараҡ тартып ҡуйҙылар ҙа, Иҙелдең был яғындағы буровойҙарға ҡарап, төрлөһө- төрлө яҡҡа таралдылар.

Улар Ишембай, Юрматы, Ҡыҙылбатыр ауылдарынан разведкала эшләп йөрөүсе башҡорт эшселәре ине. 1930 йылдың көҙөндә һәм 1931 йылдың ҡышында ер ҡаҙыу һәм башҡа шундай ҡара эштәрҙә йөрөгән был кисәге крәҫтиәндәр бөгөн буровойҙарҙың даими эшселәренә әйләнделәр...

Әхмәтгәрәй Йәнбулатов туп-тура 704-се вышкаға ҡарап китте. Шул ваҡытта 704-се буровойҙың көслө гудогы яңғырай башланы. Гудок тауышы был буровойҙы көнсығыш яғындағы оҙон «Бурлыҡ-тау» буйҙарын, яҙғы ташҡындар менән йәйрәп ятҡан Ағиҙел өҫтөн яңғыратты. Гудок тауышы алыҫтарға-алыҫтарға таралды. Вахтаға барыусылар аҙымдарын тиҙләттеләр.

Бигерәк тә, Әхмәтгәрәй ашыға, сөнки ул, бөгөн беренсе тапҡыр ғына әле, «буровик» булып вахтаға бара.

Гәрәйҙе шунда ук «юғарғы эшсе» (верховой) итеп ҡуйҙылар. Бурильщик Антонов уны үҙе менән вышканың башына алып менеп китте. Вышка буйлап борғоланып юғарыға үрмәләгән баҫҡыс, беренсе тапҡыр менгәндә, Гәрәйгә бик оҙон тойолдо. «Күгәрсен ояһы»на менеп етер саҡта ғына Гәрәй боролоп ҡараны, уның башы әйләнгән кеүек булды. «Ай-һай бейек икән» тип уйланы ул — тағы ла юғарыға ҡараны, улар «күгәрсен ояһы»на инделәр.

Бында, иң элек, йыуан ҡара арҡан кеүек нәмәгә аҫылынып торған элеватор Гәрәйҙең күҙенә салынды. Ул йәһәт кенә түбәнгә һәм юғарыға ҡарап алды. Иң юғарыла, вышканың түбәһендә эске яҡтан «кран- блок» беркетелгән, блок аша үткәрелгән арҡандың осонда элеватор. Ә түбәндә буровой машинаның тормоз өлөшө, барабандар, һәм иң уртала, скважина өҫтөндә, ротор күренә.

Бурильщик Антонов беренсе тапҡыр ғына буровой эшсеһе булып килгән Гәрәйгә өйрәтә башланы:

— Һине беҙ тәүҙә үк верховой итеп ҡуябыҙ. Ғәҙәттә, яңы алынған кешене ябай эшсе итеп йөрөтәләр. Унан һуң ғына юғарыға күсерәләр. Юғарынан тормозсы булып төшөргә, унан бурильщик булырға мөмкин.

Кочегарҙарҙан башҡа, беҙ вахтала 4 кеше эшләйәсәкбеҙ. Ә һине беҙ тәүҙә үк юғарыға ҡуйырға булдыҡ, һин бында торбаларҙың баштарын элеваторға эләктереп торорға, йәки, инструментты күтәргәндә, торбаларҙың баштарын, элеваторҙан ысҡындырып, бына бында арҡан менән беркетеп торорға тейеш буласаҡһың. Шуның өҫтөнә блоктарҙы майлап тороу ҙа һинең өҫтә буласаҡ. Бына хәҙер беҙ инструмент күтәрәбеҙ, мин эшләгәнде ҡарап тор. Әй, тормозщик, башла!

Тормозсы тормоз рычагын ҡуҙғатты. Станоктың барабаны әйләнә башланы. Барабан тирәһенә уралған арҡан барабанға уралып, скважиналағы инструмент юғарыға ынтылды. Скважинаның өҫтөндә беренсе торбаның («шәм») башы күренгәс тә, тормозсы машинаны туҡтатты. Улар икәүләп юғарғы торбаны түбәнге торбанан, бороп, һүтеп ала башланылар. Ә икенсе торбаның юғарғы башы скважина өҫтөндә нығытылды. Беренсе торба һүтелде. Тирә-яҡҡа талпына башланы. Уны ситкәрәк тартып аҙ ғына төшөрҙөләр ҙә иҙәнгә ултырттылар. Ана шул ваҡытта юғарыла Антонов, Гәрәйгә ҡарап:

— Бына ҡарап тор,— тине һәм һүтеп алынған торбаның юғарғы башын, арҡан менән эләктереп алып, «палата»ға нығытты һәм элеваторҙы ысҡындырҙы.

Тормозсы буш элеваторҙы түбәнгә төшөрҙө, һәм унда элеваторҙы икенсе торбаның башына эләктерҙеләр, уны ла күтәрҙеләр. Антонов күрһәтеүе буйынса Гәрәй үҙе эшләй башланы.

Антонов төшөп китте. Гәрәй юғарыла бер үҙе ҡалды. Ул бөтә иғтибарын ана шул, скважина эсенә, күтәрелә, һүтелә торған торбаларға, ул торбаларҙы тигеҙ итеп, яҡшылап ултыртыу һәм нисек кенә булһа ла йәһәтерәк эшләүгә йүнәлтте. 704-се буровойҙың әле скважинаһы тәрән түгел ине. Сөнки ул күптән түгел генә быраулана башлаған. Шуға күрә инструмент күтәреү эше оҙаҡҡа барманы. Түбәндә, скважинала ашалып сыҡҡан долотоны яңы долотоға алыштырҙылар. Хәҙер иниструментты төшөрә башларға кәрәк ине. Бурильщик Антонов юғарыға ҡарап:

— Үҙең генә булдыра алырһыңмы? Әллә тағы ла бер төшөндөрөп бирәйемме? — тип ҡысҡырҙы.

— Эшләп ҡарайым әле,— тине Гәрәй. Хәҙер инде элеватор менән торбаның башын әйләндереп алырға кәрәк ине.

Элеватор юғарыға күтәрелеү менән, ул үҙенән-үҙе торбаны ҡыҫып ала һәм торба скважинаға төшөрөлә. Ләкин Гәрәй элеваторҙы тиҙ генә эләктерә алманы. Был эш бик ҡатмарлы булмаһа ла, ҡулдарҙы йәһәт йөрөтөүҙе, бик йәһәт борола алыуҙы, инструмент менән эш итә белеүҙе талап итә ине. Гәрәй бик оҙаҡ тырышты. Ләкин элеватор эләкмәй ҙә эләкмәй бит. Эләктерелгән тип тормозсы элеваторҙы юғары күтәрә башлаһа, торба урынында ҡала бирә.

Түбәндә һүгенергә тотондолар. Тормозсы Гәрәйҙең ата-әсәләренә тиклем барып етте.

– Белмәгәс, тотонорға кәрәкмәҫ ине. Беренсе тапҡыр буровойға килеп ингән кешене юғарыға мендереп ҡуйһаң, шулай була ул...

Бурильщик Антонов юғарыға йүгереп менде лә үҙе тотондо.

— Бына былай эшләргә кәрәк, ҡустым! Бер нәмәһе лә юҡ бит.

Гәрәй үҙен ҙур ғәйепле кеше итеп һиҙә һәм борола алмаусылығы өсөн үҙен-үҙе әрләй. Антоновтың күҙ асып йомғансы элеваторҙы торба башына эләктергәнен һәм торбаның, бер аҙ күтәрелеп, шунда уҡ түбәнге башы менән скважинаға төшөп киткәнен күреп, «ысынлап та бер нәмәһе лә юҡ табаһа...» тип уйлай ул.

Ләкин, күңеленең бер мөйөшөндә бына был һүгенеүсе кешеләргә ҡарата асыу хисе ҡуҙғала. Шау бер тауыш Гәрәйгә «урыҫ халҡы шулай инде ул... һинең беренсе көн, беренсе сәғәттәр генә эшләүеңә ҡарамай һүгенәләр, йыуаш булһаң, баҫырҙар...» ти. Гәрәй Йәнбулатов үҙенең 38 йыллыҡ ғүмерендә бер ваҡытта ла, бер кемгә лә үҙен юҡҡа һүгергә, мыҫҡыл итергә ирек биргәне юҡ. Кәрәк булһа, уның көслө беләктәре, теләһә ниндәй генә ҡабырғаны бер һуғыуҙа йәнсеп ташларлыҡ ҙур һәм тығыҙ йоҙроҡтары хәҙер бына эшкә башларға торалар.

Ул тағы ла юғарыла бер үҙе. Ул инде элеваторҙы йәһәтерәк эләктерә. Торбалар берәм-берәм түбәнгә төшәләр, ҡыҙыу эш дауам итә.

Һуңғы торба төшөрөлөп, аҙаҡтан өҫтә квадрат ҡына ҡала. Квадратты роторға нығыталар ҙа — быраулау башлана. Скважинаның забойында хәҙер яңы долото, ер ҡатламдарын ашап, торған һайын түбәнгә төшә, ротор әйләнә. Шланг буйлап виртлуг аша раствор йөрөй. Түбәндән Әхмәтгәрәйгә:

— Хәҙергә юғарыла эш юҡ, бында төш,— тип ҡысҡыралар. Бурильщик Антоновтың йөҙөндә баяғы асыуҙың эҙе лә күренмәй, уның үҙенсә осло йөҙө юғарыға, Гәрәйгә, йылмайып ҡарай. Антонов кеҫәһенән кисет сығарып Гәрәйгә ҡарап ҡысҡыра:

— Йәнбулатов иптәш! Әйҙә хәҙер кочегаркаға барып тәмәке тартайыҡ...

Йәнбулатов, «күгәрсен ояһы»нан сыҡҡанда, теге эске тауышҡа яуап биргән кеүек, «эш ваҡытында төрлө хәл була инде ул, әрләшеү, һүгешеүҙәр булырҙар ҙа, бөтөрҙәр ҙә...» тип уйлай.

Ул, түбәнгә төшөргә тип, баҫҡысҡа сығып баҫа. Вышка башынан тирә-яҡҡа ҡарай. Уны май ҡояшының, йылы, яғымлы нурҙары, яҙғы шау-шыу менән тулған һауа урап ала...

Ана көнбайыш яҡтан Ағиҙел һул яҡтағы ярҙарынан ташып сыҡҡан да Ишембай, «Ҡыҙыл батыр» колхоздарына тиклем һыу ялтырап ята. Йылға үҙенең ҡышҡы кейеме — ҡалын боҙҙарҙан арынған, иркенләгән. Төньяҡта алыҫтан, Ағиҙел ташҡындары аша Стәрлетамаҡ ҡалаһы күренә. Ә көнсығыш яҡта «Бурлыҡ-тау» һәм Ишембай ауылынан арыраҡ яландар күгәреп күренәләр. Бына, ус төбөндә генә торған кеүек Ағиҙелдең уң ярындағы «Веселый» утарында, бына ошо буровойҙағы эшселәр һәм тирә-яҡ утарҙарҙың крәҫтиәндәре Беренсе майҙы байрам итәләр. Утар уртаһында ҙур халыҡ төркөмө бер ораторҙың һүҙен тыңлай. Ҡыҙыл әләмдәр аҡрын иҫкән йылы елдәргә талғын ғына талпыналар. Буровойҙарҙан көслө машиналар гөрөлдәүе тарала. Сажылдап парҙар күтәрелә, ә ҡыҙыл әләмдәр,

әйтерһең, яландарға йән индергән кеүек, вышкаларҙы алҡышлайҙар — мөһабәт елберҙәйҙәр һәм шунда Әхмәтгәрәй Йәнбулатовтың йөрәге сикһеҙ шатлыҡ, көс менән тула. Ул аҙ ғына быжыр йөҙө менән ана шул беренсе май кешеләренә, буровойҙарға — тирә-яҡта шаулаған яңы яҙға йылмая. Уның тирә-яҡҡа ҡарап, бөтә Ағиҙел буйын яңғыратып ҡысҡыраһы килә:

— Ағайҙар, ҡустылар, тырышайыҡ! Эшләйек!.. Улар, бурильщик Антонов менән кочегаркаға инеп, тәмәке тартырға тотоналар.

— Һин, Йәнбулатов,— ти Антонов,— үпкәләмә, эшләгәндә производствола төрлө саҡ була. Һүгенергә лә тура килгеләштерә. Но эшкә файҙа булһын тип тырышабыҙ бит. Һин был эшкә бик тиҙ төшөндөң. Тырышып эшләһәң, ике-өс айҙан уҡ тормозсы булырһың... унан бурильщик итеп үрләтербеҙ. Грамотаға өйрәнергә кәрәк, дуҫ кеше. Мин үҙем дә Бакуҙа ябай буровой эшсеһе булып эшләй башлағайным, хәҙер биш йыл эшләйем... Ярайһы. Төрлө ваҡыт булыр, күңелдә кер һаҡларға ярамай. Гәрәйҙең күңелендә баяғы асыу килеүҙең, эске ҡаршылыҡтың эҙе лә ҡалмағайны. Вышка башында ул үҙен бер тиклем ятыраҡ, сит итеберәк һиҙһә лә, бурильщик Антонов менән бер аҙ һөйләшкәс тә, уға тағы ла ғәҙәттәге тыныслығы, партизандарса ышаныслы һәм батыр настроениеһы кире ҡайтты. Бигерәк тә, Антонов, «Бакуҙа эшләйем» тигәс, үҙе менән һуғышта бергә йөрөгән Таманчукты хәтерләне.

— Граждандар һуғышында минең менән Таманчук тигән бер егет йөрөнө. Ул да Бакуҙа эшләгән. Польский фронтта үлеп ҡалды. Бик яҡшы егет ине...— тине Гәрәй.

— Шулаймы ни? Мин үҙем дә Деникин фронтында булдым, унан һуң 23 йылдарҙа ғына әле баҫмасыларға ҡаршы һуғышып йөрөнөм.

Бурильщик Антоновтың һуғышта булғанын белгәс, Гәрәй уға ҡарата тағы ла нығыраҡ яҡынлыҡ һиҙҙе. Ә Антонов һалмаҡ ҡына тауыш менән һүҙен дауам итә:

— Нефть эше ауыр эш ул, ләкин бер серенә төшөнөп алһаң, артыҡ түгел. Серенә төшөнөп алырға кәрәк. Машиналарҙың нисек эшләгәндәрен өйрәнергә, машиналар менән эшләй белергә кәрәк. Машина ул һүлпән ҡыланыуҙы, йоҡлап тороуҙы яратмай, һәр ваҡыт уяу булырға тура килә... Антонов шулай һөйләй, ә ҙур ғына ҡаҙан эсендә ут яна — һыу ҡайнай. 10 атмосфера баҫым аҫтындағы парҙар гөрөлдәп магистраль буйлап буровойға, станокка баралар. Кочегар һәм унның ярҙамсыһы, ҡаҙан аҫтында утты өҙмәҫ өсөн, йыш ҡына утын ташлай торалар...

Сәғәт 3 еткәс, беренсе вахтанан һуң, буровойҙа йыйылыш булды, һүҙ буровойҙар араһында социалистик ярыш тураһында бара ине.

Гәрәй йыйылышта һөйләнгән һүҙҙәрҙең күбеһен аңламаны. Бигерәк тә буровой эшенә ҡарата әйтелгән күп төрлө һүҙҙәр хәҙергә әле уға аңлайышлы түгелдәр ине. Шулай ҙа ул бер нәмәне ныҡ төшөндө һәм күңеленән шундай һөҙөмтә яһап ҡуйҙы: «тырышып бөтә көсөң менән эшләргә, эшкә һуңламай килергә, вахтаға килмәй ҡалмаҫҡа, эште тиҙ һәм яҡшы эшләргә...»

702-се буровой менән ярыш тураһындағы мәсьәләне тауышҡа ҡуйҙылар. Башҡалар менән Гәрәй ҙә ҡул күтәрҙе. Гәрәй бөгөндән башлап ошо коллективтың тулы хоҡуҡлы ағзаһы булды. Йыйылыштың председателе күтәрелгән ҡулдарҙы һанағанда, бармағы менән төртөп һанай-һанай, Гәрәйгә килеп еткәс, Гәрәй ҡулын юғарыраҡ күтәрҙе һәм үҙен башҡалар менән бергә, ошо ҡатмарлы-ҡатмарлы машиналарҙың, башланған ҙур эштең хужаһы, был эш өсөн яуаплы кеше итеп һиҙҙе.

Вахтанан ҡайтырға сыҡҡас, Ағиҙелгә табан барғанда, Гәрәй үҙенә генә билдәле булған эске ҡәнәғәтләнеү менән артҡа, геүләп эшләүендә дауам иткән үҙенең 704-се буровойына, боролоп ҡараны...

Ағиҙел буйындағы киң туғайҙарҙы яңғыратып, сәғәт өс икәнен белдереп, көслө гудок ҡысҡырҙы. Буровойҙарҙа вахталар алышынды. Икенсе вахталар эшкә тотондолар.

703-сө буровойҙа эштән буш булған беренсе һәм өсөнсө вахталағы эшселәр цех собраниеһына йыйылдылар. Ун бишләп кеше шунда уҡ, буровой эргәһендә, бүрәнәләр өйөмө кеүек өйөлөп ҡуйылған тимер торбалар өҫтөнә, ҡайһы берҙәре сиҙәмгә аяҡтарын бөкләп ултырҙылар.

Күптән түгел генә 704-сенән 703-сө буровойға тормозсы булып күскән Әхмәтгәрәй Йәнбулатов, рус телен ватып-ҡырып булһа ла, бөтә көсө менән фекерен аңлатырға тырыша, һүҙ таба алмағанда үл ҡулдарын ярҙамға саҡыра, ҡапыл-ҡапыл ҡулдарын болғай, башын сайҡай.

— Досадно бит, егеттәр. Бурильщик Грязев артынан беҙгә икешәр сәғәт машиналарҙы төҙәтеп маташырға тура килә. Уларҙың проходкаһы күп булмай, кемдеке күп булһын...

Шулай ти Гәрәй. Уның һүҙҙәре шунда еткәс, кочегар Морозов ҡысҡырып ебәрә:

— Шулайҙыр ҙа бит, ниңә уны үҙ бурильщигын Кузнецовҡа ғына әйтмәҫкә? Ниңә бузить итергә? Почему Грязевҡа бәйләнергә? Быныһын ишеткәс, Гәрәй тағы ла ҡыҙып китә:

— Как так әйтмәҫкә ти: эшсенең ауыҙын бикләргә уйлайһығыҙмы әллә? Советта ундай закон юҡ. Әгәр ҙә, тағы ла шулай булһа, мин икенсе төрлөрәк тә һөйләшә белермен...

Был мәсьәлә йыйылышты ҡыҙыҡтыра, һәр кем үҙ фекерен әйтеп ҡалырға теләй, һәр кем үҙен дөрөҫ уйлай тип белә. Шуға күрә йыйылышта тауыш күтәрелә. Сөнки мәсьәлә ысынлап та мөһим — 703-сө буровой июль айына бирелгән 150 метрлыҡ заданиеға яңынан 100 метр ҡаршылау планы биргәйне, йыйылыш барған көнгә, 21 июлгә, 703-сө буровой эшселәре был 250 метрлыҡ планды тулыһы менән үтәнеләр.

Тик бына, буровой мастер Лебедев иптәштең һүҙенә ҡарағанда, вахталарҙың эштәре араһында ҙур айырма бар.

— Мәҫәлән,— ти Лебедев,— Гәрәй бригадаһы һуңғы биш көнлөктә бер вахтаға, уртаса, 5,84 метр, ә Кузнецов бригадаһы бер вахтаға 2,7 метр

ғына бурить иткән... Бына был ҙур айырмалы цифрҙар йыйылыштың шаушыулы булыуына сәбәп булдылар.

— Ни өсөн былай?

— Ни өсөн бындай  айырма килеп сыға?

Был һорауҙарға мастер Лебедев тура яуап бирә алманы. Сөнки вахта һайын кемдең нисек эшләүенә, инструменттарҙы скважинаға төшөрөү-күтәреүгә һәр бер бурильщик күпме ваҡыт ҡулланыуы иҫәпкә алып барылмаған... Ә Гәрәйҙең төрлө майҙарға, бысраҡҡа буялып бөткән йөҙөндә һаман да ярым асыу, ярым аптырау билдәһе бөтмәй. Ул ҡысҡыра, ҡулдарын болғай. Нәүбәтләп, тирә-яҡта ултырғандарға ҡарап ала. Ул иң аҙ проходка биргән Кузнецов вахтаһында эшләй. Ул, тормозсы Гәрәй, иң тырышып эшләүселәрҙән иҫәпләнә. Ул уны үҙе лә белә. Шуға күрә әлеге «ике метр» цифрға бер ҙә риза түгел...

— Ни өсөн былай.?..— ти ул.— Бына Грязевтың әллә ни тиклем аварияһы булды. Әле Гәрәйҙең гайкаһы төшөп, станогы ҡаушай, әле квадрат скважинаға төшә, әле долото төптә ҡала, ә уға бер нәмә лә юҡ... Ә беҙ, вахтаны алғас, уның аварияларын төҙәтеп ваҡыт үткәрәбеҙ. Нисек түҙергә кәрәк. Тоттом да Грязевты һүктем. Беҙ ҙә барыбер эшсе, беҙ ҙә күп эшләргә тырышабыҙ. Ә машиналарҙы ла ҡарамай булмай... Профсоюзға ла барып еттем, «Мастер Грязевты яҡлай» тинем, ниңә әйтмәҫкә...

Мастер Лебедевтың дә  асыуы килә.

— Миңә барығыҙ ҙа бер. Ниңә миңә Грязевты яҡларға? Шулай булғас, былай бузить итергә ярамай. Берәй етешһеҙлек күрһәң, иң тәүҙә үҙеңдең бурильщигыңа әйт. Улар вахта начальниктары, үҙҙәре һөйләшерҙәр... Мастер Лебедевтың кәйефе киткән. Сөнки үҙ буровойында тәртипһеҙлек тураһында юғары ойошмаларға ишетелеүен теләмәй. Имеш, профсоюзға, Буркомға саҡырып алһындар ҙа әйтһендәр икән:

— Иптәш Лебедев, һинең буровойҙағы эшселәрҙән жалоба бар...— тиһендәр имеш, күптәнге нефть эшсеһе, коммунист Лебедев өсөн күңеллеме ни ул!..

Йыйылыш вахталар араһында ярыш договорын ҡабул итте. Ярыштың төп шарттарынан береһе: «Нисек тә, күберәк проходка бирергә. Ләкин шул ваҡытта механизмдарҙы лә һаҡ тоторға. Аварияларҙы кәметергә» тигән пункт инә.

Оҙаҡҡа ғына һуҙылған йыйылыштан һуң, эшселәр ҡайтырға ҡуҙғалдылар. Ләкин, һүҙ берләшкән кеүек, таралыр алдынан барыһы ла буровой вышкаһында икенсе вахтала эшләүсе, шуға күрә йыйылышта була алмаған Грязевты тирәләп алдылар.

Грязев вахтаһы скважинаға «сигәмдәрҙе» төшөрөп бөткән, хәҙер быраулай ине. Станок эргәһендә бары тормозсы эшсе генә шаулап әйләнгән квадратҡа ҡарап тора. Үҙенең ҡулы рычагта, бер аяғы педалдә.

Йыйылыштан килгән эшселәр машиналар шаулауы аша, Грязевҡа вахталар араһында ярыш тураһында ҡысҡырып аңлатырға тотондолар.

Гәрәй тантаналы йылмайыулы йөҙ менән:

— Машиналарҙы ла һаҡ тоторға,— тип ҡысҡырҙы.

— Иртәгәнән башлап, иҫәп эшен юлға һалырға кәрәк,— тине мастер буровойҙан сығып барышлай Ул Грязевҡа яҡын уҡ килеп:

— Василий, һин ҡара, механизмдарҙы күҙәтеп эшлә. Һинең һаҡһыҙлыҡ арҡаһында авария булһа, минән изгелек көтмә,— тине.

— Тыңлайым, Лебедев иптәш,— тине Грязев. Был һүҙҙәрҙе ишетеп ҡалған тормозсы эшсе станоктың зырлап әйләнеүсе цистерналарына, квадратҡа ентекләберәк ҡарарға тотондо. Сөнки берәй нәмә булһа, уға шунда уҡ машинаны туҡтатырға кәрәк...

703-сө буровойҙа ҡыҙыу эш ҡайнай. Вышканың эргәһендә, кочегаркала ҡыҙыл төҫкә буялған «Робев» ҡаҙанында шаулап һыу ҡайнай. Оҙон торбалар буйлап ҡайнар пар буровойҙың компрессерына бара, станокты, насостарҙы хәрәкәткә килтерә.

Буровой шаулай.

Кочегарка гөрләй.

Вахта ҡыҙыу эш өҫтөндә. Минуттар, сәғәттәр үткән һайын буровойҙың «шәмдәре» ер аҫтындағы нефткә яҡынлашалар.

Квадрат әйләнә, «долото», скважинаның төбөндә ерҙе кимереп, һаман түбәнәйә төшә...

Грязев вахтаһында эшләүселәр бөгөн машиналарға йышыраҡ күҙ һалалар.

Авария яһамаҫҡа тырышалар.

Сөнки вахталар араһында ярыш башланды...

Утыҙ икенсе йылдың 26 ғинуарында, кис, 703-сө буровой мастеры Лебедев, Ишембай ауылына квартираһына ҡайтты ла, ятырға әҙерләнеп, сисенергә тотондо. Уның бөтә тәнендә арығанлыҡ һиҙелә. Мәшәҡәтле һәм ауыр эш көнөнән һуң, хәҙер бына мендәргә башты һалһаң, шунда уҡ йоҡлайһың да китәһең инде. Күҙ ҡабаҡтары үҙ-үҙҙәренән ябылалар. Әллә берәй юлсы өйгә инергә һорап шаҡыймы, әллә Ишембайҙың шыҡһыҙ ҡыш елдәре эштән арып ҡайтҡан мастерға йоҡларға — ял итергә ирек бирмәҫкә теләп шаҡылдайҙармы? Тышта буран ҡотора. Буран нәмә менәндер тәҙрәне шаҡый. Мастерҙың башында төрлө уйҙар барыһы бергә буталып, ул бер нәмә тураһында ғына уйлай алмай. Ишембайҙа үткән бер йыл ғүмере, бер йыл буйына һаман да әле һөҙөмтәһеҙ булған эше, эштә булған төрлө ваҡиғалар ҡайһы ваҡыт талаш, ыҙғыштар, шәхси тормоштоң насарлығы — йүнле-рәтле квартира юҡлыҡ һәм башҡа, башҡалар тураһындағы уйҙар, уның иркенәй башҡа, башына киләләр ҙә бер-береһенә бәйләнәләр, ураалалар, мастер бер нәмә лә уйламаҫҡа тырыша. Хәҙер йоҡларға, ял итергә кәрәк... Шунда уның буровойынан ике кеше йүгереп килеп инәләр. Уларҙың, ашыҡҡанлыҡтан, хәлдәре бөткән, тындарын йыш-йыш алалар, йөҙҙәре ағарған, икеһе лә бергә һөйләйҙәр:

— Иптәш Лебедев!.. Әллә нәмә булды скважинала...

Мастер ҡапыл ғына нәмә уйларға ла белмәне, ләкин бик ныҡ шикләнде:

— Берегеҙ генә һөйләгеҙ, ни бар?

— Скважина эсенән бер нәмә сыға башланы. Тәүҙә растворҙы юғарыға бәрҙе. Унан һыу тиһәң, һыу түгел, әллә ниндәй ҡара төҫтәге нәмә ыжғырып атылып сыға. Нефть ундай булмай торғандыр, беҙ әйтәбеҙ... Үҙенең еҫе бик яман, башты әйләндерә...

Мастер, тиҙ-тиҙ генә кире кейенеп, эшселәр артынан буровойға сығып йүгерҙе. Ҡарт нефтсе мастер теге нәмәне күрмәҫтән үк унының газ фонтаны икәнен белде һәм эске бер өмөтлөлөк унының бөтә арығанлығын, йоҡоларын юҡҡа сығарҙы. Сөнки был факт — буровойҙың эшендә инде бер һөҙөмтәгә яҡынлашыу тигән һүҙ ине...

Ғинуарҙан башлап өс ай буйына 703-сө скважина, торған һайын, ни фонтандары менән мәшәҡәтләнде, инструментты күтәрә башланыңмы — бөтә растворҙы юғарыға ата ла бәрә, ата ла бәрә. Эшселәрҙе нефть тамсылары ҡатыш раствор бысрағына мансый, газ еҫе эшселәрҙең баштарына тейә, ҡайһы береһе буровойҙың эсенән үк сыға алмай йығылалар. Уларҙы күтәреп тышҡа сығаралар.

Апрель урталарында разведканың администрацияһы скважинаны быраулауҙы туҡтатыу фекеренә килде. Баш геолог Насал да шундай фекерҙә ине.

Бер көндө буровойҙар араһында йөрөгәндә, разведка башлығы Хударов мастер Лебедевҡа быраулауҙы иртәгәнән туҡтатырға ҡушты.

Был хәбәр буровой эшселәренә насар тәьҫир итте.

— Неужели нефть булмаҫ?

Шундай газ фонтандары бәреп торған скважинала нефть булмай мөмкин түгел...

— Бик күп көс түгелгән бит әле, иптәштәр, нисек итеп ҡыҙғанмай ташлайһың инде...

— Әйҙәгеҙ, иптәштәр, аҙаҡҡы көн бер дөбөрҙәтеп эшләп алайыҡ!

Вахта, яңы долото ҡуйып, инструментты төшөрә башланы. Тормозсы Йәнбулатовтың хәрәкәттәре бөгөн бигерәк тә етеҙ булдылар. Ғәҙәттә шау-шыу, бурильщик тарафынан күп тапҡырҙар өйрәтеү менән үтә торған

инструмент төшөрөү эше бөгөн тауыш-тынһыҙ барҙы. Тормозсы менән бергә буровой эшселәре лә етеҙлектә унан ҡалышманы.

Тормозда торған бурильщик хатта бер аҙ аптыраны ла: быңдай тиҙ һәм оҫта эш бер йыл буйына беренсе тапҡыр ине.

Бер шәмде төшөрәләр ҙә уның скважинанан сығып торған юғарғы башына икенсе шәмдең түбәнге башын боралар. Шәмде асҡыс менән әләктереп алып, ротор тирәһендә йүгереп әйләнәләр. Элеваторҙы шәмдең муфтаһына, шунан осона кейҙерәләр.

Ул шапылдап ҡына тора.

Быраулау төн буйына барҙы.

Икенсе көн иртәнсәк быраулау дауам итте. Тағы ла бер килеп әйтмәй, эшселәр быраулауҙы туҡтатмаҫҡа булдылар. Икенсе көндө сәғәт 12-ләрҙә көслө фонтан бәрҙе, ләкин был фонтан, газ ғына түгел, газ ҡатыш нефть фонтаны ине. Фонтан бәрә башлағас та, эшселәр, ситкәрәк китеп, бер генә минут күҙҙәрен ҙур асып, күҙәтеп торҙолар. Иң тәүҙә фонтан шаулауы аҫтында Йәнбулатовтың тауышы яңғыраны; ул, буровойҙың вышкаһына бәрелеп, стена буйлап кире түбәндән ағып төшкән һәм бөтә буровой эсен ҡаплап алған ҡара ҡуйы май кеүек нефткә һәм атылыуҙа дауам иткән шаушыулы фонтанға, унан мастерға ҡарап:

– Ошо буламы инде нефть, иптәш мастер? – тине һәм мастерҙың яуап биргәнен дә көтмәй бер ҡулы менән иҙәндең раствор саңдарына һәм тирә-яҡҡа ағып ятҡан нефтте күреп алып бармаҡтары менән ышҡып ҡараны. Киң итеп йылмайҙы.

Мастерҙың:

– Инструменттарҙы йыйырға кәрәк, егеттәр, шәмдәрҙе ана шул арҡан менән уратып алығыҙ, бер-береһенә бәрелмәһендәр!.. – тигән һүҙҙәрен ишетеүе менән, эшселәр инструменттарға ташландылар. Фонтан ҙур көс менән атыуында дауам итте. Скважинанан сығыу менән, елле көндә шаярып йүгереп йөрөгән яланбаш ҡыҙ баланың туҙғыған сәстәре кеүек фонтан тирә-яҡҡа тарала һәм вышканың түбәһенә бәрә. Скважина үкерә, фонтан шаулап

вышка эсендә өйөлөп торған торбаларҙы ҡуҙғатып бер-береһенә һуҡҡылай, фонтан шаулауына тимер тауыштары ҡушыла.

Былдай ваҡытта тимер нәмәләрҙең бер-береһенә бәрелеүенән атҡы һәм шуның арҡаһында янғын сығырға мөмкин, шуға күрә торбаларҙы бер-береһенә белдермәҫкә – һаҡ булырға кәрәк. Мастерҙың приказы буйынса, бөтә вахта инструменттарға ташланды. Ваҡ инструменттарҙы ситкәрәк алып ҡуйҙылар, арҡан менән уратып алып, бер-береһенә ҡыҫып, ҡуҙғалмаҫлыҡ яһанылар. Фонтан уларҙы нефткә ҡойондорҙо – иң ҡурҡыныс урындарҙа бер нәмәгә ҡарамай эшләп йөрөгән Йәнбулатов үҙе лә һиҙмәй ҡалды – газға иҫереп шунда фонтан аҫтында йығылды. Уны тиҙ генә күтәреп алдылар ҙа тышҡа сығарып ергә һалдылар.

Гәрәй, айнып алғас та, иң тәүҙә тирә-яҡтағы тауыштарҙы ишетте. Кеше һөйләшкән, ниндәйҙер тимер нәмәләрҙең бәрелеүҙәренән сыҡҡан тауыштар һәм кочегаркала ҡаҙандарҙың, көслө пар баҫымы аҫтында, сажылдауҙары, күптән түгел генә булып үткән фонтан ваҡиғаһын, шунда уҡ, бөтә тулылығы менән уның күҙ алдына килтереп баҫтырҙылар. Ул үҙенең йөҙөндә апрель ҡояшының йылы нурҙарын һиҙҙе. Ул  күҙен асырға теләне – ләкин күҙе бер нәмә лә күрмәй ине. Ауыртҡан күҙҙәрен ыуғылап Гәрәй аяғына баҫты. Йәшен тиҙлеге менән уның башына ҡурҡыныслы уй килде:

– “Әллә һуҡырайҙымммы?” Уның ҡолаҡ төбөндә генә Лебедевтың тауышы:

– Күҙең күрмәйме, Йәнбулатов? Ничево, оҙаҡламай бөтөр… бынан һуң, ул тиклем фонтан аҫтында эшләмәҫһең… – тине.

Был ваҡиғаларҙан һуң бер айлап ваҡыт үтеүгә инде, тәүге дүрт буровойҙың икеһе – 702-се һәм 703-сө буровойҙарҙың скважиналары системалы рәүештә нефть бирә торған скважиналарға әйләнделәр.

Көҙгө айҙарҙың береһендә инженер Присс Өфөгә энергетика кәңәшмәһенә китте. Кәңәшмәлә Ишембай нефте тураһында махсус белдереү яһарға тейеш ине. Башҡортостан өлкә ойошмалары алдында ул нәмә әйтәсәген, хәҙер үк, алдан белә. Был докладҡа әҙерләнеп тороу

кәрәкмәй, сөнки был докладтың темаһы уның йөкмәткеһе ике йылдан артыҡ практика менән инженерҙың һәм бөтә нефтселәрҙең ҡандарына һеңешкән. Инженер Өфөләге иптәштәргә һәм бөтә Башҡортостан хеҙмәтсәндәре алдына барып: «Ишембайҙа нефть бар, иптәштәр. 702, 703-сө скважиналар быны асыҡ күрһәтәләр. Хәҙер һис бер төрлө шик булырға мөмкин түгел...» тип әйтәсәк.

Партия ячейкаһы йыйылышында, ячейка секретары Волков Гәрәйҙең ғаризаһын, анкетаһын уҡып сыҡты ла, йыйылышта ҡатнашыусыларға ҡарап:

— Һорауҙар бармы, иптәштәр? — тине.

— Юҡ! Беләбеҙ бит Йәнбулатовты,— тине берәү.

— Минең һорау бар,— тине Төлкөбаев.— Йәнбулатов иптәш, үҙең ярлы кеше балаһы. Ҡыҙыл Армияла күп булғанһың, партизан исеме тағып йөрөйһөң, нишләп ошо йәшкә тиклем партияға инмәнең?

Гәрәй былдай һорауҙың булырын алдан уҡ белһә лә, Төлкөбаев тарафынан әйтелгәс, аптырап ҡалды. Иң тәүҙә ул Төлкөбаевтың бик батыр ҡыланыуына, үҙ өйөндә ултырған кеүек үҙен бик иркен һиҙеүенә — бер нисек тип тә баһа бирә алманы.— Гәрәй уйлауынса, Төлкөбаев, бигерәк тә, Йәнбулат малайы Гәрәй алдында үҙен икенсе төрлөрәк тоторға тейеш ине. Ә ул, бер ҙә харап, ҙур ҡыланып һорау биреп ултырған була. «Ысынлап та, Төлкөбай сволочь шул...» тип уйланы Гәрәй. Икенсе яҡтан ҡаты ғына бәрелеп ҡуйһа ла шикләнә, сөнки йыйылыштағы халыҡ, Төлкөбайға түгел, Гәрәйгә ҡарап яуап көтөп тора... Йыйылыштағыларҙың береһен дә старшина балаһы Төлкөбаевтың һорауы, уның батырлығы ғәжәпләндермәй.

Бер аҙ уйлап торғандан һуң, Гәрәй түҙә алманы, ҡаты ғына итеп:

— Сит элемент биргән һорауға мин яуап бирә алмайым,— тине.

Йыйылышта ултырыусылар ғәжәпләнеп бер-береһенә ҡаранылар.

— Ничево, Йәнбулатов,— тине секретарь,— был һорау бәлки башҡа иптәштәрҙе лә ҡыҙыҡһындыра торғандыр. Яуапһыҙ ҡалдырма әйҙә...

Гәрәйҙең секретарға лә асыуы килде. «Ни бысағыма тип был сволочты партия йыйылыштарына индерәләр? Ни өсөн секретарь хәҙер шуны ҡыуып

сығармай? Уның миңә һорау бирергә ни хаҡы бар?» тип уйланы һәм, ҙур ҡыйынлыҡ менән асыуын баҫып, яуап бирҙе.

— Грамота булмау мишайт итте, иптәштәр, грамота булмағас, партияла мин ниндәй файҙа килтерәсәкмен тип уйлаған саҡтар булды. Фронттан ҡайтҡас та, йорт эштәренә бирелеп киттем. Бында разведкала эшләй башлағас, партияға инергә теләк үҫте. Ударник эшсе исемен алып йөрө лә, бөтә эштә партия әйткәнсә алда тороп эшлә — нисек партиянан ситтә тораһың? Буровойҙағы иптәштәр ҙә бик димләнеләр. Үҙебеҙҙең большевиктар партияһына һиңә күптән инде инергә ине, тиҙәр. Шулай түгелме?

Башҡа һорау биреүсе булманы, һөйләүҙәрҙә мастер үҙе, Гәрәй менән бергә эшләүсе бурильщик Иванов сығып һөйләнеләр, уларҙың фекерҙәре бер ине.

Йәнбулатовты һис шикләнмәй партияға алырға мөмкин.

Ҡыҙыулығы бар барын да, шулай ҙа төҙәлер әле. Производство төҙәтә ул. Тәүҙә бында килеп эшләй башлағандағыға ҡарағанда уның характеры хәҙер күп үҙгәрҙе...

Ячейка бер тауыштан Гәрәйҙе партияға ҡабул итте. Буровойҙан өйгә ҡайтҡанда, Гәрәй үҙендә ниндәйҙер бер рәхәтлек, эске ҡәнәғәтләнеү һиҙҙе. Бындай настроение Гәрәйҙең ғүмерендә икенсе генә тапҡыр ине. Беренсе тапҡыр, буровойҙа ысын эшсе булып эшләй башлағас, шулай булғайны...

Ләкин, йыйылышта Төлкөбаев менән булған бәрелеш тураһындағы уйҙар уның күңеленә ниндәйҙер бер күләгә ташлайҙар, хәҙергә ныҡлап асыҡланмаған, ләкин Төлкөбаевҡа ғына түгел, тағы ла нәмәгәлер шикләнеп ҡарау хисе тыуҙыралар...

Бер нисә көндән һуң инженер үҙе, Гәрәйҙе осратып, уның менән йылмайып күреште һәм кеҫәһенән записка кенәгәһе, ҡәләм сығарып:

— Йәнбулатов иптәш,— тине,— беҙ һине бурильщиклыҡҡа үрләтергә булдыҡ. Быға тиклем булған кеүек тырышып эшләүеңде, киләсәктә лә дауам итерһең, тип уйлайым. Иртәнге вахтанан башлап 707-се буровойҙа

бурильщик булып эшләй башларһың... Унда ла мастер һәйбәт кеше, партия члены. Булатовты беләһең бит?..

Гәрәй ҙә киң йылмайыу менән яуап бирҙе.

— Тырышырмын, әлбиттә, иптәш инженер...

Ҡояш түбәнәйгәндән-түбәнәйә. Көнбайыш яғындағы офоҡҡа яҡынайған һайын, ҡояштың нурҙары кәмей барған кеүек, күндәҙ күҙҙе сағылдырырлыҡ аҡ һәм ҡыҙыу нурлы ҡояш хәҙер ҡыҙғылтыраҡ һәм ҙурыраҡ булып күренә, һауа һалҡыная бара.

Ә буровой вышкаһын эшләүсе балта оҫталарының Прокофьев артеле 713-сө вышкала һаман да эшләүендә дауам итә. Балта сапҡан тауыш, бысҡы сажлауы, ҡаҙау ҡаҡҡан тауыштар яңғырай.

Юнысҡылар йышҡы эсенән борғоланып өҫкә сығалар ҙа еңел генә ергә төшәләр...

Тик бына Бәхтейәр ағай ғына күңелһеҙ күренә. Сөнки ул балтасы түгел, сөнки хәҙер улар кеүек бирелеп, бөтә көсөн йәйеп эшләй алмай. Сөнки ул буровой партия эшсеһе. Уны бында 707-се буровойҙан күсергәндәр. Бында әле эш юҡ, вышка күптән эшләнеп бөткән. Нефтселәр әйткәнсә, «фонарь күтәрелгән», тик машиналар килеп етмәй. Ҡаҙандар һаман да Раевканан килеп еткерелмәгәндәр. Шуға күрә буровой партияһында ла эш тығыҙ түгел...

Бәхтейәр Ишембаев шунда таралып ятҡан күп бүрәнәләрҙең береһенә ултырған да аҡрын хәрәкәт менән тәмәке төрә. Үҙе аҫҡа ҡараған. Нефткә мансылып бөткән эшләпәһе аҫтынан танау осо ла эйәге генә күренеп тора.

— Ни хәл, Бәхтейәр ағай, эштәр барамы? Бәхтейәр ағай күтәрелеп ҡарамай, һаңғырау тауыш менән мығырҙай:

— Бысағым барһынмы ни... Ҡасан килә әле ул машиналар... Теләмәйем мин бында ҡалырға... Иртәгә беренсе вахтаға уҡ үҙемдең буровойға китәм...— ти ул.

Бәхтейәр ағай оҙаҡ итеп тәмәкеһен һура ла, папиростың көлөн өрөп:

— Ғәрлек бит, ҡустым,— ти.— 703-сө буровойҙа баштан башлап эшләнем. Ниндәй ауырлыҡтар күрмәнек, ә нефтте сығарҙыҡ. Нефть газы икешәр көн күҙҙе ауырттырып, һуҡырайтып бөтөрә торғайны. Шундай әсе... Ну, унда нефть сыҡҡас, 707-се буровойға күстек. Беренсе метрҙан уҡ ҡатнаштым, 557 метр төшкәс, газ бәреп сыҡты, оҙаҡламай нефте лә сығырға тейеш. Ә мине алдылар ҙа бында ебәрҙеләр. Башлаған эштең аҙағын да күрге килмәйме ни? Газы булғас, нефте лә була инде уның. Бына минең шул нефтте күрге килә. Шуны күреү өсөн, шул нефтте алыу өсөн ҡаҙабыҙ бит инде. Ә һине, нефть сығыр саҡта ғына, икенсе урынға алһындар, имеш...

— Бында ла бит тәжрибәле эшселәр кәрәк, Бәхтейәр ағай...

— Шулайын-шулай ҙа бит. Минән башҡа кеше бөткәнме ни... Эшселәрҙән берәү:

— Ни, Бәхтейәр ағай, барыбер түгелме ни, премияһын бында ла алаһың һин...— ти, ударсыны йыуатырға тырыша.

— Эш премияла түгел,— ти Ишембаев,— эштең аҙағын күрге килә.

Вышка яһаусыларҙан Закиров, оҙон бер таҡтаны йышҡы менән шымартып торған еренән, бер генә минутҡа туҡтап, һүҙгә ҡушылды:

— Ударник өсөн эш ҡайҙа булһа ла барыбер түгелме ни, ҡайҙа ҡушһалар — шунда эшлә... Беҙҙе бына Грозныйҙан Уралға, Юғары Чусовойға ебәрҙеләр. Унан бында Ишембайға күстек, барыбер. Ҡайҙа ла бер ҡояш. Кавказ тауҙары, Урал тауҙары, Ағиҙел буйҙары... Әллә күпме вышка эшләнде инде. Бында килгәс кенә инде, өсөнсө вышка эшләйбеҙ... 21 йылдан бирле шул эштә...— шулай ти Закиров, үҙе яңынан йышҡыһын йөрөтә башлай, йоҡа ғына аҡ таптар төрөлөп-төрөлөп сығалар. Закировтың хәрәкәте һалмаҡ һәм ныҡ, уның тауышы ла ышаныслы.

Ишембаев ҡаршы килмәй:

— Шулай ҙа ул...— ти, тағы ла бер ҡабат, аҡрын ғына тороп, станок урынлаштырған ергә, вышка фонаре аҫтына китә...

Ҡояш алыҫтағы һырттар артына йәшеренеп, Иҙел буйҙарына һиҙҙермәй генә киске ҡараңғылыҡ килә башлағас, 710-сы буровойға Стәрле

яғынан ике трактор яҡынлаша. Башта уларҙың бер көйгә генә гөрөлдәгән матур тауыштары ишетелде. Бына ул көсәйгәндән-көсәйҙе. Был гөрөлдәүгә иғтибар итеүсе булманы. Разведка тирәһендә трактор тауышы бер әле генә түгел инде, ләкин вышка эргәһенә килеп еткәс, бөтә халыҡ боролоп ҡараны. Ҙур «ХТЗ» тракторҙары буровой өсөн Раевканан ҙур ҡаҙандар алып киләләр ине. Оҙаҡ көтөлгәйнеләр улар. Буровой партияһындағы кешеләр йылмайып уҡ ебәрҙеләр.

— Ҡаҙандар килә, ҡаҙандар...

— Иртәгәнән үк ҡаҙандар ултырта  башлайбыҙ...

— Кочегарканы йәһәтерәк рәтләргә!..

Ишембаев та үҙгәрҙе. Дөйөм шау-шыу, ҡаҙан килеп етеү шатлығы уға ла тәьҫир итте. Уның көнгә һәм шул уҡ нефткә көрәнәйгән йөҙөндә йылмайыу билдәһе сыҡты. Буровой партия эшселәре ҡаҙандарҙы тирәләп һырып алдылар. Ҡулдары менән ҙур ҡаҙандарҙың «ҡорһағын» тотҡоланылар, тикшерергә тотондолар.

Был ваҡытта әле лә урынынан китмәгән ударник балтасы Закиров алыҫтанығраҡ тегеләргә йылмайып ҡарап тора ине...

Төн булды. Ағиҙел буйындағы «Тора-тау» яғынан, теҙмә тауҙар артынан, тулған ай күтәрелде. Бейек күктә иҫәпһеҙ-һанһыҙ йондоҙҙар йымылданылар. Ерҙә лә уттар йымылданы. Тегендә-бында таралып ятҡан унлаған буровойҙарҙа уттар яндырылды. Түбәндә лә, юғарыла ла уттар… Төндәрҙә Ағиҙел өҫтөнән килгән ҙур пароходтарҙы хәтерләтәләр буровойҙар... Вышкалар, иң юғары будкаларына тиклем, фонарҙар менән биҙәкләнгәндәр.

Буровойҙар, төнгө вахталар хәҙер эш өҫтөндә. Вахталар төндәр буйына ла туҡтамай, ерҙең арҡаһын быраулап, ҡалын ҡатламдар, ҡаты ангидриттар, хатта саҡматаш кеүек таштарҙы үтеп, барған һайын нефткә яҡынлашалар...

Июль айында ғына 710, 711, 714-се буровойҙар эшкә ебәрелеп, улар хәҙер бер нисә йөҙ метрҙар тәрәнлектә скважиналар һалдылар. Удар

эшләйҙәр. Август айында, ошо көндәрҙә үк, 712, 713-сө буровойҙар эшләй башлаясаҡтар.

713-сө вышканы алыҫ Кавказдан килгән Прокофьев артеле, иң юғары темптар менән эшләп, 8 көндә тамамланы. Ул хәҙер 716-сы вышканы яһау эшенә күсте.

713-сө буровой, буровой партияһы бөгөн машиналарҙы, станоктарҙы урынлаштырыу эштәрен ашыҡтыра. Август айында бөтә разведкала 2000 метр проходка бирелергә тейеш. Был планға 713-сө буровой ҙа ингән. Ул эшләнеп бөтөргә һәм августа 100 метр быраулап та өлгөрөргә тейеш.

Ишембай нефть промыслаларының ҡарт ударсыһы Бәхтейәр ағай 713-сө вышканың «күгәрсен ояһы»на менгән дә кран-блок эргәһен рәтләп йөрөй. Уның тауышы алыҫтан ишетелгән кеүек.

— Эшләйбеҙ әле, иптәштәр. Ҡайҙа булһа ла мах бирмәбеҙ. Ударник исемен алырбыҙ. Ударник исемен алырбыҙ барыбер. Шулай ҙа үкенесерәк, егет... Күсәһе килмәгәйне...

Ишембаевтың йөҙөндә кисәге кәйефһеҙлек күренмәй. Сөнки, ул хәҙер бөтә барлығы менән эшкә бирелгән, 30-лап кешенән торған буровой партиялағы башҡа эшселәр менән бергә уның уйында нисек тә вышканы тиҙерәк рәтләп бөтөрөү. Сөнки илгә, Урал-Кузбассҡа тиҙерәк нефть кәрәк...

Йәмле йәй үтеп, тағы ла ҡыш килде. Гәрәй Йәнбулатов разведканың эшенә бөтә барлығы, бөтә тормошо менән сумды. Уның бөтә шәхси тормошо ана шул буровойға, буровойҙың көндәлек эшенә бәйләнде Партияға инеү менән Гәрәй был бәйләнеште тағы ла тығыҙыраҡ, ныҒыраҡ итеп һиҙҙе. Уның ауылы эшләгән буровойынан алыҫ булыуға ҡарамайынса, үҙ вахтаһы булмаған ваҡытта ла ул буровойға барып шундағы эш менән таныша торғайны.

Шул арҡала, һуңғы ваҡытта, ул ҡатыны Бибикамал еңгә менән дә һүҙгә килешә башланы Бибикамал еңгә Гәрәй эштән ҡайтҡан һайын бәйләнә торған булды:

— Соланда буран уйнап тора. Һалам табып алып, шуны рәтләр инең. Шул нефтенә бәйләнде лә ҡалды бит. Бүтән кеше ана 8 сәғәт эшләп ҡайта ла йортон- ерен, хужалығын ҡайғырта. Өс бала атаһы булып, комсомолдар кеүек, йортоңдо онотоп йөрөргә оят кәрәк әҙерәк...

Шулай зарлана Бибикамал еңгә, әле быныһын, әле тегенеһен таба, ә Гәрәй аңлатырға тырыша:

— Бушап булмай, ҡатын. Ҡайһы бер эштәрҙе үҙең дә эшләп ҡуяһың бит. Бер эшкә тотонғас, ысын итеп эшләргә кәрәк уны. Байға эшләгәндә генә ул «арба ватылһа утын, үгеҙ үлһә ит» тип йөрөһәң дә бата торғайны. Хәҙер бит байҙарға түгел, үҙебеҙҙең эште эшләйбеҙ... Ләкин Бибикамал еңгә әллә былай бер нәмә лә аңламай, әллә аңларға теләмәй — һаман үҙенекен һөйләй ҙә тора.

— Ҡуй инде, Гәрәй, әллә нишләнең,— ти ул.

Ҡышҡы аяҙ көндәрҙең береһе ине. Ял көнө булғанға, Гәрәй бөгөн буровойға барманы... Ул йорт тирәһендәге эштәргә тотондо. Кәзә өсөн йылы урын әҙерләп ҡуйҙы, һалам алып ҡайтып соланды тыҡҡылаштырҙы. Ҡапҡа төбөндә өйөлгән ҡарҙы көрәп ташланы. Күптән бирле инде Гәрәйҙең йорт тирәһендә былай бирелеп эшләгәне юҡ ине Бибикамал еңгә өсөн бөгөнгө көн байрам кеүек булды. Ул, көндәге кеүек, бөгөн зарланманы. Ниндәй ҙә булһа берәй йомош менән тышҡа сыҡҡанда, иренең эшләп йөрөгәнен күреп, уға йылмайып ҡарай ҙа ниндәй ҙә булһа йылы һүҙ әйтә. Иренең исемен дә, Гәрәй генә түгел, ауыҙын тултырып, Әхмәтгәрәй ти.

Көндөҙгө сәйҙе лә Бибикамал еңгә ғәҙәттәгенән иркенерәк әҙерләне. Бойҙай оно табып картуф бәрәмәсе бешерҙе, һөт алып ҡайтты. Бәхеткә ҡаршы разведканың продснабтар йөгөнән шәкәр ҙә биргәйнеләр.

— Әхмәтгәрәй, әйҙә сәй эсергә ин инде,— тине ул тышҡа сығып.

Бибикамал еңгә был һүҙҙәрҙе әйткәндә, урам яғынан да тауыш ишетелде:

— Әхмәтгәрәй, буровойығыҙ эшләмәй бит, иртәнән бирле туҡтап тора, мастерығыҙ ауырып ята, ти...

Гәрәй өйгә лә инеп торманы, Бибикамал еңгә ҡысҡырып ҡалды:

— Әхмәтгәрәй, сәй әҙерләнгән, ҡайҙа бараһың?..

Гәрәйҙең яуабы ишетелмәне. Ул буровойға барып еткәндә, унда тәрән тынлыҡ ине. Кочегарканың торбаһынан төтөн сыҡҡаны күренмәй, парҙар сажылдағаны, тимер тауыштары ишетелмәй.

Бурильщик менән тормозсы уны:

— Харап малай, Йәнбулатов, нефть килтермәйҙәр, кочегар ҙа ебегән ауыҙ, ҡаҙанда пар бөтмәй тороп, беҙгә килеп әйтмәне. Беҙ борабыҙ ҙа борабыҙ — бер ваҡытты шып-стоп! Туҡтаны ла ҡуйҙы! Кочегар хәҙер үҙе буровой отделға китте. Мастерға звонить иткәйнек— ул ауырып ята икән... — тигән һүҙҙәр менән ҡаршыланылар.

— Нисек инде үҙ вахтаңды күпме нефть менән ҡабул иткәнеңде белмәйһең? Тәүҙә ул мерникты барып ҡарарға булманымы? Хәҙер бит инструментты туңдырғанһығыҙ! — тине Гәрәй.

— Ну бит нефть минең эш түгел, кочегар яуап бирергә тейеш...— бурильщиктың тауышында ғәжәпләнеү һәм асыу килеү һиҙелә ине. Был һүҙҙәрҙе әйтеүсе күңеленән Гәрәй тураһында «ике-өс йыл буйы разведкала эшләй. Кочегаркала яғыулыҡ өсөн, пар биреү өсөн кем яуаплы икәнен дә белмәй» тип уйланы.

Гәрәй ҙә ҡыҙып китте:

— Вахтаның хужаһы кем? Һин белергә тейеш түгелме ни? Байҙарға эшләгән кеүек кенә эшләйһегеҙ... егеттәр...

Шул һүҙҙәр менән Йәнбулатов буровойҙан сығып йүгерҙе. Ағиҙел аша сыҡҡанда, уға кочегар осраны.

— Сволочтар, бер-береһенә ҡушып тик торалар. Аттарҙы Стәрлетамаҡҡа алып китеп бөткәндәр. Ҡаҙаҡтар аръяҡтағы буровойҙарға ташып йөрөйҙәр...

Кочегар Йәнбулатов менән тағы ла кире боролдо, һәм улар икәүләп поселкаға ҡарай киттеләр.

Яҡшы ғына атты артлы санаға егеп алған бер кеше атты шәп атлатып посёлканан сыҡты ла кочегар менән Гәрәйгә ҡаршы килә ине, улар юл бирҙеләр. Санала барыусы уларға өндәшмәне лә — уҙып китте.

— Бына өлкән конюх китеп бара...— тине кочегар. Гәрәйҙең күҙҙәре асыу менән йылтыранылар.

— Ғәлләм Төлкөбаев!—тип ҡысҡырҙы Гәрәй. Төлкөбаев, тауышҡа боролоп ҡарамай ғына, атын туҡтатты. Гәрәй, унын эргәһенә барып:

— Беҙҙең буровойҙа иртәнән бирле нефть юҡ...— тине. Төлкөбаев бер ҙә иҫе китмәй генә, тыныс ҡына шундай яуап бирҙе:

— Транспортта минән башҡа ла кеше бар. Мин йомош менән ҡалаға барам.

Шул һүҙҙәр менән ул дилбегәләрҙе ҡаҡты. Ләкин Гәрәй дилбегәләргә тотондо ла:

— Әйҙә, борол! — тине.— Тәүҙә буровойға нефть ебәр, ат табып бир — унан китерһең...

Төлкөбаевтың да күҙҙәре ҙур асылды. Улар бер генә минут бер-береһенә ҡарашып торҙолар... Был ҡараштар шундай уҫал, шундай асыулы булдылар...

— Кит юлдан,— тине ҡапыл Төлкөбаев. Уның тауышы бик аҡрын, хырылдап, әллә ҡайҙан, эстән сыҡты.

— Әйҙә управляющийға,— тине Гәрәй. Ул үҙе барып аттың башына тотондо, бора башланы. Ғәлләм санаға баҫып ҡысҡырҙы:

— Кит, хулиган!

Ләкин шунда торған кочегар яурындарынан баҫып уны санаға кире ултыртты.

— Ҡыҙма, иптәш начальник, шулай ҡыҙырға ярамай. Юғиһә, беләһеңме, үҙеңде бәйләп мәкегә ташларбыҙ.

— Сволочь — тине Гәрәй, күсер урынына үҙе ултырып атты посёлкаға ҡарай ҡыуҙы. Әллә ҡурҡты, әллә һүҙ таба алманы — Төлкөбаев бер нәмә лә өндәшмәне. Управляющий йортона барып еткәнсә, улар шулай һүҙһеҙ барҙылар...

Аттар аҙбарында конюхтар: «Төлкөбаев һеҙҙең буровойға нефть ташырға тейеш булған ат менән Аллағыуат ауылына араҡы алырға китте»,— тинеләр.

Буровойҙың мернигына нефть тултырып, күп ҡыйынлыҡтар менән инструментты ирәттеләр. Яңынан быраулау башланмай тороп, Гәрәй буровойҙан китмәне.

Тормозда торған бурильщик менән бөгөн ял итергә тейеш булған Гәрәй араһында ҡыҫҡа ғына шундай һөйләшеү булды.

— Управляющий Төлкөбаевты эштән сығарыу тураһында приказ яҙып ҡалды...— тине Гәрәй. Уның киң маңлайында тир тамсылары ялтырай, ҡырған, ләкин тағы ла үҫеп килә торған ҡара йөн менән ҡапланған йөҙө тормоздағы бурильщикка киң йылмайып ҡарай...

Бурильщик һул ҡулы менән станоктың тиҙлек тәгәрсәген тотҡан да, машиналар гөрөлдәүек үҙ тауышы менән баҫырға тырышып, ҡысҡыра:

— Шәп булған! Тик һин юҡҡа былай эт кеүек сабып йөрөйһөң — беҙҙең эш түгел бит ул! Бына беҙҙең эш — әйләндер! И точка. Һинең менән беҙгә барыбер рәхмәт әйтмәҫтәр...

Гәрәйҙең йөҙөндәге йылмайыу билдәләре юғала. Ул, ҡаштарын йыйырып, түбән ҡарай һәм боролоп буровойҙан ҡайтырға сыға.

Ишембайҙың аҡ япмаға төрөлгән һалҡын яландарын күк тынлыҡ ҡаплаған. Ләкин был тынлыҡ юғарыла ғына. Йондоҙҙар менән биҙәлгән күкшел күктә генә тынлыҡ хөкөм һөрә. Ер шаулай, Ишембай ерҙәрендә буровойҙар, Ағиҙелдең бейек яр башында элекке кескәй генә. Бельский, Веселый ауылдары урынында разведканың механик мастерскойы, электр станцияһы, тимерлек, ҡаҙан цехы, яңы посёлка шаулай. Тирә-яҡта машиналар геүелдәүе өҙлөкһөҙ яңғырап тора...

Юҡ! Буровойҙаң сығып, яландарға киткәс, беренсе моментта ғына һауа тын кеүек һиҙелә. Ләкин бында тынлыҡ юҡ. Ерҙәге шау-шыу, тимер тауыштары һауаға ла, күктәргә лә күтәреләләр. Күктәге иҫәпһеҙ-һанһыҙ йондоҙҙар менән ярышып, ерҙә электр уттары йылтырайҙар. Бигерәк тә, посёлкала йылтыраған йыш уттар, кешеләрҙе үҙҙәренә саҡырып ымлаған йәки күҙ ҡыҫҡан кеүек, йымылдап яналар.

Бурильщик Гәрәйгә күңелле лә, күңелһеҙ ҙә. Бына был шау-шыулы машиналар гөрөлдәүендә, уларҙың эштәрендә, инструменттарҙың шаулап ер аҫтына тәрәнәйә барыуҙарында һәм скважиналарҙан нефть фонтандары бәреүҙә ул үҙенең туранан-тура ҡатнашын уйлай ҙа, үҙен ошо шау-шыулы тормоштоң айырылмай торған киҫәге, шул машиналар, кешеләр армияһының башында барыусы һуғышсы итеп һиҙә. Партком бюроһы ултырыштарының береһендә партком секретарының: «Коммунист производстволағы һәр бер ваҡлыҡты белергә, производство өсөн ҡайғырырға тейеш»,— тигән һүҙҙәрен хәтерләй. Был уйҙар Гәрәйгә күңеллелек, батырлыҡ бирәләр.

Унын аяҡтары ныҕыраҡ баҫып атлайҙар. Ләкин, бөгөнгө ваҡиға, нефть ташытыу урынына, араҡы артынан йөрөгән Төлкөбаев һәм коммунист башы менән «нефть ҡайғыртыу беҙҙең эш түгел» тип төкөрөп ҡарай торған бурильщик — былар барыһы ла Гәрәйҙе күңелһеҙләндерҙеләр. Бурильщиктың һуңғы һүҙҙәрен яуапһыҙ ҡалдырғанға үкенә Гәрәй. Ләкин, уйлап-уйлап ҡарай ҙа, ниндәй яуап менән үҙенең фекерен, дөрөҫ тип һанаған фекерен, ниндәй һүҙҙәр менән аңлатасағын белмәй. Ул тик шуны ғына әйтә ала: бурильщик дөрөҫ уйламай, ундай ҡараш дөрөҫ түгел. Ундай ҡараштарға, партком секретары һүҙе менән әйткәндә, отпор бирергә кәрәк...

«Кешеләр бер генә төрлө уйламайҙар, бер генә төрлө эшләмәйҙәр шул. Төрлө кеше бар. Ай-яй төрлө кеше бар...» тип уйлай Гәрәй.

...Яланды киске ҡараңғылыҡ ҡосаҡлап алды, күктәге йондоҙҙар һәм ерҙәге электр уттары яҡтыраҡ йымылданылар. Көндөң һалҡынлығы көсәйә

төштө. Көнбайыштан ел ҡуҙғалды. Бер аҙҙан һуң ел ерҙә ятҡан ҡарҙарҙы осорта башланы һәм ел көслөрәк иҫә башлаған кеүек булды.

Гәрәй декабрь аҙаҡтарында вахтаға барғанда буранда аҙашып үлгән комсомолец Бәдретдиновты хәтерләне.

...27 декабрҙың кисе ине. Ишембай яландарында шул көндө башланған көслө буран кискә ҡарай ҙа тынманы, ә көсәйгәндән-көсәйә бирҙе. 707-се буровойҙа кочегар ярҙамсыһы булып эшләүсе Бәдретдинов вахтаға барырға йыйынды. Уның менән бер ятаҡта тороусы иптәштәре Вәлиев, Ниғмәтуллиндар уға бөгөн вахтаға бармаҫҡа кәңәш бирҙеләр, хатта, комсомол коллективы секретары Исхаков үҙе лә Бәдретдиновҡа:

— Борсолма, егет, бөгөн бармаһаң да—енәйәт булмаҫ. Буранда аҙашыуың бар, безобразие, аяҡ атларға ла хәл юҡ...— тигәйне.

Ләкин производствола күп йылдар буйына эшләп, бер генә прогул да яһамаған ударсы эшсе һәм разведкала сыға торған «Башҡортостан вышкаһы» газетаһының актив хәбәрсеһе комсомолец Бәдретдинов үҙенең прогул яһауын күҙ алдына килтерә алманы. Шул көндәрҙә генә союз Үҙәк башҡармаһының прогулдар тураһында ҡарары сыҡҡайны.

Разведкала был ҡарарҙы бойомға ашырыу өсөн ҡаты көрәш алып барыла ине.

— Бер нәмә лә булмаҫ әле, иптәштәр,— тине ул,—неужели шул буранды еңеп булмаҫ икән...

...Посёлканы аша үтеп, Ағиҙел аша Бәдретдинов көнбайышҡа, 707-се буровойға, ҡарай атланы. Бурандарға инеп юғалды. Ләкин буровойға барып етә алманы, кире лә ҡайтманы. Разведканың пожар командаһы һәм комсомолдар көн буйына бер нисә тапҡырҙар Ағиҙелдең һул яғындағы Ишембай яландарының эҙләнмәгән урындарын ҡалдырманылар. Тик өсөнсө көндә «Ирек» колхозсылары урманға утынға барған ерҙә уның ҡар аҫтынан аҙ ғына сығып торған аяҡтарын күреп аҡтарып алғандар...

Яңы күтәрелеп килә торған бурандар аша үҙ ауылына ҡарай яҡынлашып килгәндә, Гәрәй ана шул йәш ударсы, производство өсөн

үҙенең ғүмерен юғалтыу ҡурҡынысы алдында ла сигенмәгән һәм шул юлда ваҡытһыҙ һәләк булған комсомолец Бәдретдинов тураһында уйланы.

Баяғы бурильщикка, Төлкөбаевҡа һәм бына был буранға ҡаршы булған асыуы тағы ла көсәйә төштө. Өйөнә ҡайтып ингәс, Бибикамал еңгәнең шелтәле һүҙенә лә ул, ғәҙәттәгесә, йомшаҡ һәм йылмайыулы түгел, ҡаты һүҙҙәре менән асыулы яуап бирҙе:

— Етәр! Исмаһам, һин эсте бошорма әле, ҡайҙа бер аҙ ҡапҡыларға ла йоҡларға кәрәк, иртәгә иртүк бит вахтаға бараһы бар...

Ҡатыны менән былдай асыулы һөйләшеүе Гәрәйҙә бик һирәк була. Былдай ваҡытта Бибикамал еңгә бер нәмә лә өндәшмәй. Хәҙер ҙә ул шулай эшләне. Өндәшмәй-нитмәй генә иренең алдына самауыр һәм ашамлыҡтарҙы ҡуйҙы ла урын йәйә башланы...

Партком бюроһының актив менән ҡатнаш йыйылышы ғәҙәттәгесә шау-шыулы булды һәм оҙаҡҡа һуҙылды. Көндәлек эштә, производство ваҡлыҡтарына бәйләнгән мәсьәләләрҙә разведканың төрлө учреждениеларында төрлө ҡаршылыҡтарға осраған эшселәр күңелдәрендә йыйылған бөтә уйҙарын, зарҙарын, бында килеп, асып һалдылар. Айырым етешһеҙлектәрҙе тыуҙырыусы айырым кешеләргә ҡарата үҙ-ара тәнҡит утын ебәрҙеләр. Разведка майҙанында, Ишембай яланында таралып ултырған буровойҙарҙың, ярҙамсы цехтарҙың эштәрендәге уңыш һәм етешһеҙлектәрҙең асыҡ факттары бында килеп йыйналдылар.

Буровой эшселәре ваҡытында нефть ташылмауға, яҡты етмәүгә, механик мастерскойҙың заказдарҙы оҙаҡ тотоуына, столовойҙың насар эшләүенә һәм башҡаларға бюроның иғтибарын йүнәлттеләр. Мастерской кешеләре буровиктарҙың оборудованиеға насар тотоноуҙарын, машиналарҙы йыш ватыуҙарын һөйләнеләр.

Бурильщик Гәрәй ҙә һөйләне. Ул, партком бюроһында беренсе тапҡыр һөйләгәнгә күрә, тәүҙә бер аҙ ҡаушаны. Үҙенә ҡараған әллә нисә пар күҙҙәр уға һынап ҡараған кеүек тойолдолар. Ул үҙҙәренең буровойында кисәге ваҡиғаның бөтә ваҡлыҡтары тураһында һөйләй башланы, һөйләгән

һайын ҡаушауы кәмей, тәүҙә аҡрый ғына сыҡҡан тауышы ла күтәрелә һәм көсәйә барҙы. Аҙаҡтан Төлкөбаевҡа туҡтап, Гәрәй һүҙен шулай бөтөрҙө:

— Ундай элементтарҙы разведкаға яҡын ебәрергә ярамай. Ул сволочтар боҙоҡлоҡ эшләүҙән башҡаны белмәйҙәр ..

Парткомдың ойоштороу бүлеге мөдире Питренко Гәрәйҙе өйрәтергә тотондо:

— Һин әле партияла күптән түгел. Коммунист кешегә шулай һөйләү килешмәй ул. Өйрәнергә кәрәк, һин үҙеңдең сығышыңда оппортунистар тураһында, эштәге уңыштар тураһында әйтмәнең, бер яҡлы ғына һөйләнең, һөйләргә өйрәнергә кәрәк. Шунан килеп Төлкөбаев тураһында ла улай бер ҙә уйламай-нитмәй насар һөйләү — килешмәй ул. Ул производствола эшләгәндә лә үҙен яҡшы күрһәтте. Транспортта эшләүгә үрләткәндә минең менән согласовать иткәйнеләр. Мин ҡаршы килмәнем. Сөнки ул кеше бик тырышып эшләне. Вообще улай орҙо-бәрҙе ҡыланырға ярамай. Беҙ коммунистар.

Тағы ла күп кенә һөйләне Питренко. Гәрәй уның һүҙҙәренән бер нәмә лә аңламаны. Ләкин аңламаһа ла, Питренконың хата һөйләүен төшөнөп тора ине.

— Беҙ әллә ниндәй мәктәптәр бөтмәгән, нисек тура килә — шулай һөйләйбеҙ ҙә ҡуябыҙ.. — тине ул. Питренко:

— Әлбиттә, сит элементтарға беҙҙә урын булырға тейеш түгел,— тип бөтөрҙө үҙенең һүҙен.

Иң аҙаҡтан партком секретары һөйләне.

Ултырышта һөйләгән бөтә һүҙҙәр, әйтелгән фекерҙәр уның бер нисә һүҙе менән йыйылып, уҡмаштырылып, йомғаҡ яһап әйтелделәр. Был һүҙҙәр бөтә асыҡлығы менән иртәгәге эшкә директивалар ине.

— Эйәһеҙлеккә һуғырға кәрәк, иптәштәр,— тине секретарь,— эш башында ултырыусылар үҙҙәренең яуаплы яҡтарын ныҡ һиҙергә тейештәр. Ә бының өсөн, иптәш управляющий (секретарь шунда ултырған управляющийға ҡараны), начальниктарҙы кәметергә кәрәк, һәр дүрт эшсегә

бер начальник тура килә. Шуға күрә яуаплылыҡ та аҙ. Был нигә ярай? Иптәш Питренко, һин сиктән тыш насар сығыш яһаның, эшселәр менән улай һөйләшмәйҙәр, Йәнбулатов иптәш йөҙ проценты менән дөрөҫ һөйләне. Оппортунист тигән һүҙҙе әйтмәһә лә — шулар тураһында асыҡ, конкрет факттар менән һөйләне. Ысынлап та, синфи уяусанлыҡты көсәйтергә кәрәк, һәр бер коммунист, комсомол үҙе менән бергә эшләүсе икенсе кешенең кем икәнен белергә, белергә тырышырға тейеш. Төлкөбаевты эшкә алып кадрҙар бүлеге хата эшләгән, беҙ ҙә күҙебеҙҙе асыбыраҡ ҡарамағанбыҙ. Быны танырға кәрәк, иптәш Питренко. Әгәр ҙә беҙҙең бөтә коммунистар Йәнбулатов кеүек эшләһә, бик яҡшы булыр ине. Йәнбулатов — биш йыллыҡ пландың идеяһы— большевизм менән ысынлап та һуғарылған кеше. Ул үҙен бөтә эштә хужа итеп һиҙә. Беҙҙең эштәге һәр бер етешһеҙлек уның үҙ етешһеҙлеге булып күренә. Ул үҙе быларҙы әйтмәне. Ул факттарҙы күрһәтте, ләкин был факттар шул турала әйтәләр, һәр бер коммунист шундай булырға тейеш...

Партком бюроһы ултырышынан һуң, Йәнбулатовтың күңеле тағы ла күтәрелеп китте. Ул үҙенең дөрөҫ эшләгәнлеген белде. Партком секретарының һүҙҙәре уның үҙ эшенә ышанысын тағы ла арттырҙы.

Ярты төндәрҙә өйөнә ҡайтҡас, ул Бибикамал еңгәнең ғәҙәттәге мығырҙауына был юлы, теге, ял көнөндә буровойҙан һуңлап ҡайтҡан көндәге кеүек, асыуланманы. Ҡатынының биленән тотоп алып:

— Асыуланма әле, Бибикамалҡайым, мин бит партком заседаниеһында ултырҙым... Иркенләп тороп барыһын да һөйләп бирҙем. Секретарь һинең Гәрәйеңде маҡтап ебәрҙе. Ә һин...—тине.

Улар 709-сынан 720-се буровойға күстеләр. 709-сы скважина эксплуатацияға бирелде Ә улар, бөтә буровой партия, 709-сы вышканы ҡалдырып, яңы буровойға киттеләр. Кочегарка, буровой станок, бөтә машиналар яңы буровойға ташылды. 709-сы скважина өҫтөндә бары нефткә мансылған ҡара вышка ғына ултырып ҡалды.

Хәҙер унда тынлыҡ хөкөм һөрә, пар ҡаҙандары көслө пар ҡыҫымы аҫтында ярһынып шауламайҙар, машиналар гөрөлдәүе тынған. Ротор шаулап әйләнмәй— тыныс хәҙер 709-сы вышкала.

Ләкин скважина тынмай, һәр бер ярты сәғәт һайып тип әйтерлек бәргән нефть фонтандары «ташланған» вышкалағы тынлыҡты боҙалар. Күп йөҙ метр тәрәнлектә ер аҫтында ятҡан нефть ташҡыны ҙур көс менән өҫкә ынтыла.

Юғарыға, күктәргә ашырға ынтыла көслө фонтан. Ләкин кешеләр уға һауаға осорға ирек бирмәйҙәр. Торбалар буйлап нефть ҙур шаңдарға, мерниктарға аға.

Нефтселәр өсөн айҙар буйына тырышып быраулаған, ҡаты ангидрит, гипс породаларын тишеп яһалған тәрән скважиналарҙан нефть сығыуҙан да шатлыҡлы эш булырмы?

Скважина геологтар күрһәткән нефтле горизонтҡа яҡыная башлау менән, буровой эшселәре әленән-әле нефтле породаларға етеүҙе көтәләр. Бурильщик, бураулау эше нормаль барғанда, скважинанан циркуляция яһап сыҡҡан иретмәгә күҙен ташлап тора, танауын йыйырып скважина яғын еҫкәй.

— «Иретмә өҫтөндә нефть тамсылары йәйелеп сыҡмаймы?»

— «Газ еҫе килмәйме?»

Әгәр ҙә газ еҫе килә башлаһа, бурильщиктың, йөрәге йышыраҡ тибә башлай. Вахта аҙағында, ул вахтаның 8 сәғәтлек эше тураһында буровойҙың рапорттар журналына яҙғанда:

«Газ еҫе килә» тип яҙа һәм, эсендәге шатлығын белдермәҫ өсөн, йөҙөн етди тота.

Нефть өсөн ҡара тиреңде түгеп, тырышып эшлә имеш тә, бөтә ил, һинең эшеңә ҡарап, күҙәтеп, ҙур өмөттәр бәйләп торһон имеш тә — нефть сығыуға нисек итеп шатланмайһың?

Ләкин буровойҙың 709-сы партияһы нефть фонтаны аҫтында байрам итмәне. Беренсе көслө фонтан бәргәс, бурильщик-тормозсы, штурвальщик-

кочегар бер- береһенә ҡарап йылмайыштылар. Әллә нәмә генә әйтергә ауыҙҙар асылды. Ләкин ҙур һүҙҙәр әйтелмәй ҡалдылар, йөрәктән ташып килгән шатлыҡ нефткә мансылған мыйыҡ-һаҡалдар һәм ҡаштар аҫтына йәшеренде. Сөнки мастер Миронов вахтаға, хәҙер был фонтан туҡтау менән үк, һис кисекмәҫтән, буровойҙа таралып ятҡан торбалар, төрлө тимер киҫәктәрен йыйып ҡуйырға приказ бирҙе. Мастерҙың йөҙө ғәҙәттәгенән дә етдиерәк ине.

Эшселәр ҙә, мастерҙың хатта асыулы күренгән кеүек йөҙөнә ҡарап, әле байрам итергә иртәлеген, шатлыҡҡа бирелеүе лә иртә икәнен төшөндөләр.

Сөнки алда әле тағы ла ҡатыраҡ, аяуһыҙыраҡ көрәштәр тора.

Буровой партия йөрәктәрҙе уратып алған шатлыҡ һәм алда торған көрәшкә етди, уҫал ынтылыш менән яңы урынға күсте...

— Понимаешь, һаман да әле буровойҙы эшкә ҡуша алмайбыҙ... Быны бурильщик Лебедев һөйләй. Был теге 709-сыла фонтан аҫтына тормоз рычагын ебәрмәй геройлыҡ күрһәткән Лебедев. Улар  хәҙер 720-се буровойҙы эшкә ҡушырға йөрөйҙәр

Тәүҙә 709-сынан алып дөйәләр менән килтерелгән ҡаҙандар юлдағы нефть посёлкаһы менән 709-сы араһында тәрән соҡорҙа ҡалдылар. Ауыр йөктәр тейәп киң Ҡаҙағстан яландарын арҡырыға, буйға иңләй ала торған сыҙамлы дөйәләрҙең «Рубит» ҡаҙандарына көстәре етмәне. Техника кәрәк булды. Көслө «Катер» тракторы кәрәк булды.

Ә бурильщик Лебедевтың асыуы килә:

— 709-сы буровойҙағы оборудованиены 720-се буровойға күсереү өсөн һүткәндә бер кем дә күҙәтмәгән. Беҙҙең вахта яңы буровойҙа кран-блокты урынлаштырып ҡалды,— ти Лебедев.— Машиналарҙың частарын тирә-яҡтағы буровойҙар таратып алып бөткәндәр. Поршенде 711-се, цилиндрҙа 716-сы буровойға алғандар. Машинаның хәҙер яртыһы ғына ҡалған. Ә бит 720-се буровой унынсы декабргә үк эшкә башларға тейеш.

Бурильщиктар асыулы йөрөйҙәр, быраулау бүлеген һүгәләр. Хәҙер улар яңы скважина яһарға, яңы урында нефть табырға ынтылалар. Байрам ҡайғыһы бармы ни бында?..

Сәғәт төнгө ике самаһында бер кеше 716-сы буровойҙан сыҡты ла, юлды, һуҡмаҡты тикшермәй, туранан-тура, тиҙ-тиҙ аҙымдар менән нефть посёлкаһындағы транспорттар торған өйгә ҡарай китте. Ул, Ишембай яландары буйлап ҡотороноп килгән бурандарҙы йырып, меселкаға барып етте һәм өйҙөң ишеген асты. Ҙур түгел өй эсендәге бөтә иҙәнде тултырып ятҡан кешеләр өҫтөндә ҡыҙыу һәм төрлө еҫтәр килеп торған һауа ишектән ингән кешенең танауын әсетеп үтте. Бер кеше, йоҡлаған урынында ултырып, тәмәке тарта. Башҡалары хырылдап йоҡлайҙар.

— Хәҙер генә тороп, 16-сы буровойға кәмендә 10 мискә һыу килтерергә кәрәк,— тине буровойҙан килгән кеше.

Тәмәке тартып ултырыусы — колхоздан килгән, договор менән эшләүсе крәҫтиән — ашыҡмай ғына тәмәкеһен һуңғы тапҡыр һурҙы ла, аҡрын ғына, йоҡоло тауыш менән:

— Әле таң атмаған бит — таң атҡас, эшкә башларбыҙ... шунда ҡарарбыҙ...— тине һәм, иҫкереп бөткән ҡыҫҡа тунды ябынып, тағы ла ятырға әҙерләнде.

Буровойҙан килгән кеше уға ятырға ирек бирмәне:

— Һеҙ бит норманы килтереп бөтмәгәнһегеҙ. Давай ҡуҙғалығыҙ...

— Эш хаҡын мискә башына ике тапҡыр арттырып бирһәгеҙ, мин үҙем барырмын. Быларҙы уятып та тормабыҙ...

Буровойҙан килеүсенең асыуы ҡуҙғалды, бына был бәндәне яғаһынан тотоп елтерәткеһе килде. Ләкин, асыуын баҫырға тырышты.

— Ярай. Һуңынан ҡарарбыҙ. Әйҙә, булмаһа, һеҙҙәге аттарҙы алып, мин үҙем ташырға тотонормон. Беҙгә бер нәмә лә түгел ул.

Крәҫтиән күршеһен уятты ла, улар кейенә башланылар.

Буровойҙан килгән кеше, уларға ат егергә булышып, һыу юлына оҙатып ебәрҙе.

Был кеше партком тарафынан буровойҙарға өҙөклөктө бөтөрөргә беркетелгән коммунистарҙың береһе ине. Буровойға кире килгәс, ул, блокнотын сығарып, унда:

«Безобразие, 716-сы эргәһендә ҡоҙоҡ юҡ.

Һыуҙы ат менән ташыйҙар, көнөнә йөҙәр һум китә. Ә йылына күпме китә? Ҡоҙоҡ ҡаҙый башлағандар ҙа ташлағандар.

Бөгөндән үк бында һыу мәсьәләһен хәл итергә кәрәк.

Нефть өсөн көрәш фронтында тревога.

Өҙөклөк тәрәнәйә бара, ноябрҙың биш көнлөгөндә 133 метр проходка яһалған булһа, декабрҙең икенсе биш көнлөгөндә ул ни бары 85 метр яһалды.

Декабрь штурм айы.

Оҙаҡламай бер нисә көндән икенсе биш йыллыҡҡа аяҡ баҫабыҙ.

Позор, иптәштәр!» — тип яҙып ҡуйҙы.

Көндәр-төндәр буйы Ишембай яландарында буран ҡотора.

Посёлка урамдарындағы һәм тирә-яҡтағы вышкаларҙағы электр фонарҙарын, посёлка өйҙәренең тәҙрәләренән теҙелеп күренгән уттарҙы, буровойҙарҙың көслө гөрөлдәүен буран күмеп китергә тырышҡан кеүек ҡылана. Ләкин булдыра алмай. Разведкала көнө-төнө тормош, көрәш ҡайнай. Көрәш – нисек тә күберәк проходка биреү өсөн көрәш, простойҙарға ҡаршы көрәш, нефть өсөн көрәш.

Партком бюроһы ултырыштарының береһендә, механический мастерскойҙарҙың эше тураһында доклад тыңланып, бюро быраулау бүлеге алдына был мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйҙы.

Мастерской эшендә план булырға, уның эше асыҡландырылырға тейеш!

Разведкала, быраулау производствоһында ремонт мастерскойы, уның механический, электросварка, тимерлек, ҡаҙан цехтары менән иң әһәмиәтле быуын һанала.

Разведка ҙурайған һайын, буровойҙар күбәйгән һайын — эштәр ҡатмарлана барҙы. Ярҙамсы цехтар өсөн дә эш күбәйгәндән күбәйҙе. Бигерәк тә, яңы буровойҙарҙы тиҙ һәм яҡшы итеп эшкә ҡушыу — ул буровойҙарҙың оборудованиеларына тиҙ ремонт яһау, кәрәк частарҙы тиҙ эшләп биреүҙе талап итә ине.

Партком бюроһының быраулау бүлеге мөдире Шашников был турала:

— Әлбиттә, план яҡшы, — тине, — тик бына беҙҙең шарттарҙа планлаштырыу бик ауыр... нефть эше ул күп кенә нәмәләргә бәйләнгән. Көтөлмәгәндә, берәй авария килеп сыға ла, бөтә планды емерә лә ташлай...

Шашников — ул ҡарт нефтсе, нефть производствоһында бер нисә ун йылдар буйына эшләй Ул инде нефть эшенең күп әсеһен-сөсөһөн татыған. Шул производствола бит уның сәстәре лә ағара башлаған. Ә бында, бюрола, ултырыусылар араһындағы кешеләрҙең күбеһе әле Ишембайҙа ғына йәки Уралда ғына нефть еҫен еҫкәгәндәр. Ә бына был газета эшсеһе быйыл ғына, күптән түгел генә, өлкә газеталарҙан килеп эшләй башлаған. Шул көйөнсә лә белекле булған булалар бит әле. Имеш, иптәш Шашников планды баһалап еткермәй, имеш, партия телендә был оппортунислыҡ тип атала...

Ҙур стажлы коммунист Шашниковтың был һуңғы һүҙгә асыуы ҡабара.

— Нефть промышленносы — ауыл хужалығы түгел бит ул,— тип Шашников нефть эшенең ауырлығы тураһында һөйләп алып китә.

Ләкин бюро Шашников алдына мәсьәләне ҡаты ҡуйҙы.

— План булырға тейеш, план булғанда ла күпме нәмә эшләү тураһында ҡоро контроль заданиеға түгел, техник яҡтан ныҡ нигеҙләнгән, бөтә ваҡлыҡтары эшләнгән ысын план бирелергә тейеш...

Сөнки 1932 йылдың аҙағынан, 1933 йылдың ҡышҡы айҙарында ла буровой планы үтәлмәй килә. Проходка планын үтәүҙәге өҙөклөк тәрәнәйгәндән-тәрәнәйә бара. Разведка газеталарының һәр номеры шул өҙөклөк тураһында яҙа.

Партком бюроһы ултырышы төндәр буйына һуҙыла.

Ә яңы буровойҙарҙы билдәләнгән срогында эшкә ҡушыу, ярҙамсы цехтарҙың эштәрен яҡшыртыу, быраулау планын үтәүгә ярҙам итәсәк.

Шул көндәрҙә үткәрелгән механик цех эшселәренең митингыһы, яңы буровойҙы билдәләнгән срогында ебәреүҙә штурм үткәрергә, мастерскойҙың эшендә ныҡлы планлылыҡ булдырырға тигән ҡарар сығарҙы. Көн һайын штурмдың барышы тураһында стена газетаһы — бюллетень сыға башланы.

Партком бюроһының һәм эшселәр митингыһының ҡарары һәр бер эшсе тарафынан практикаға әйләндерелде.

3 февралдә сыҡҡан ...се һанлы бюллетень ҙур хәрефтәр менән: «Иптәш Шашников, беҙ план менән эшләргә тейешбеҙ. Беҙгә план бирелгән»,— тигән талапты ҡысҡырҙы.

Бюллетендә, көн һайын штурмдың барышы, ударсылар, ялҡауҙар, прогулсылар тураһында хәбәр итә торҙолар. Стена газетаһы үҙенең алыҫтан уҡ йылтырап күренеп торған ҙур күҙҙәре менән бөтә цехҡа, бөтә кешегә ҡараны.

«Ҡасан инде лодырь Малышовты мастерскойҙан алаһығыҙ». «Токарҙар Подгорный һәм Скупцовтар тарафынан 711-се буровой колоколы 5 сәғәт урынына 12 сәғәт төҙәтелде». «Слесарь Королев, слесарь Шакировты социалистик ярышҡа саҡыра».

«Машинист Дауытов 5 февралдә питателгә заказ алған да, бер кемгә лә бирмәгән».

«Иптәш Томшина эшкә килде лә шунда уҡ ҡайҙалыр китеп юғалды. Уға иң кәрәкле эш — гайкаларҙы тикшерергә бирелгәйне. (Позор!)»

«Малков бригадаһы план буйынса заказдарҙы үтәмәй. Ошо көнгә тиклем рватель менән элеваторҙы төҙәтмәгәндәр. Ханжин бригадаһы уларҙы буксирға ала... »

«Слесарь Шакиров һәм Сарков 716-сы буровой өсөн головка йыйғайнылар. Шарушкаларҙы дөрөҫ ҡуймағандар. 8 февралдә головканы

кире мастерскойға килтереп ташланылар. Эшкә иғтибарлыраҡ булырға кәрәк!..»

Был һүҙҙәр слесарь комсомол Шакировтың башына һуҡҡан кеүек, икенсе көндө сменаға килеү менән бөтә кеше, бөтә мастерской Шакировҡа асыуланып ҡараған кеүек булды.

— «Шайтан белһен, нишләп улай хата ебәрелгән. Вот безобразие»,— тип уйланы Шакиров. Ул бригадир Ханжиндың асыуланыуын, һүгенергә тотоноуын көткәйне, ләкин бригадирҙың йөҙөндә ғәҙәттәге йылмайыуын күрҙе, уның дуҫтарса «һаумы, Шакиров», тигән һүҙен ишетте. Бригадир уға бөгөнгө эште бирҙе.

— Бына был головкаға яңы шарушкалар ҡуйырға кәрәк. Ҡара, кисәге кеүек алама эшләмә, тағы ла ҡалырһың. Күрәһеңме, ана секерәйеп ҡарап тора стена газетаһы?

Шакиров күтәрелеп ҡараманы, өндәшмәне лә. Тик эсенән генә: «Үҙем дә күреп торам, иптәш бригадир. Бик һиҙенеп торам...» — тип уйланы һәм, тирә-яҡтағы тауыштарға, машиналар гөрөлдәүенә иғтибар итмәй, бөтә барлығы менән эшкә бирелде.

Ә мастерской эсендә, бигерәк тә, һуңғы көндәрҙәге көслө шау-шыу, трансмиссияның аҙ ғына сажылдап, токарь станоктарҙың тимер ашай-ашай тыҡырҙап әйләнеүҙәре, ҡайыштар шартлауы, машиналар шаулауы эсендә һирәк кенә кеше тауыштары, двигателдәрҙең бер көйгә генә өҙләкһеҙ туҡылдауы бөтә смена буйына, бөтә көн буйына дауам итте.

Ҡарарҙар, ярышҡа саҡырышыуҙар, стена газеталарындағы һүҙҙәр бына ошо машиналар һәм улар менән эшләүсе кешеләр тарафынан тиҙ төҙәтелгән головкаларға, блоктарға, насостарға, гайкаларға, шайбаларға, әллә нисә төрлө эре һәм ваҡ оборудованиеларға, частарға әүерелделәр...

Ханжин бригадаһы яңы буровойҙарҙы эшкә ҡушыуҙа үҙенә бирелгән заданиеларҙы тулыһы менән үтәне һәм эштә булған буровойҙарҙың ҡырҡыу инструменттарын срогында эшләп торҙо. Малков бригадаһын буксирға алып, үҙенең 64 сәғәт ваҡытын бирҙе.

Megaport Plandың үтәлеше тураһында сводка:

| | |
|---|---|
| Ханжин бригадаһы | 119 процент. |
| Тычинин бригадаһы | 105 процент. |
| Новиков бригадаһы | 100 процент. |
| Малков бригадаһы | 78 процент. |

Цехтың өс мөйөшө разведка администрацияһынан Ханжин бригадаһын бүләкләүҙе һорай.

Малков бригадаһындағы иптәштәр, ҡасан инде һеҙ удар темптар алаһығыҙ?»

Комсомолец слесарь Шакиров, посёлканың беренсе барагында электросварщик Шәйхетдинов, Әбүбәкиров, Кашаевтар менән бергә тора.

Шакиров сменанан сыҡҡанда, сәғәт дүрттә көн ҡараңғыланғайны инде. Һирәк кенә, мамыҡ кеүек йомшаҡ ҡар яуа. Яуған ҡарҙар аша посёлкала электр уттары йылтырайҙар. Шау-шыулы мастерскойҙан сыҡҡас, тышта Шакировты һалҡынса ғына һауа һәм тынлыҡ урап ала. Ул смена буйына эшләнгән эштә яҡшы уҡ ҡына арыған беләктәрен, физкультуралағы кеүек, яҡ-яҡҡа ташлай, күкрәген киреп, һалҡын, саф һауаны йота.

Бөгөн уның кәйефе ғәҙәттәгенән яҡшыраҡ. Ул, баракка ҡайтҡас, электросварщик, комсомолец иптәштәренә ниндәй яуап бирәсәген уйлай: «Бөгөн көлә алмаҫһығыҙ инде, егеттәр». Бер көндәге стена газетаһында минең турала уҡығандар ҙа көләләр бит. «Ҡыҙҙар артынан йөрөп, сарушканы яңылыш ҡуйғанһың. Маруся һинең башты бик ныҡ әйләндергән ахыры» — тиҙәр. Бөгөн уҡып ҡарағыҙ әле. Бригадир Ханжин үҙе әйтеп бирер. Минең слесарь Шакиров хәҙер беренсе булып бара, тип әйтер. Ул бая ғына собраниела шулай тине бит. Бәйләнеп ҡарағыҙ әле, егеттәр, хәҙер Шакиров ағайығыҙға!..» Шундай уйҙар уйлап ҡайта Шакиров. Уйҙарының ҡайһы бер урынында уның йөҙө һирәк-һирәк йылмайып ҡуя.

Ләкин ул баракка ҡайтып ингәндә, электросварщиктар эштән ҡайтмағайнылар әле. Шакиров столовойға ла барып ҡайтты.

Тегендә-бында барып килде. Уҡыу залына барып газеталар уҡыштырҙы. Тегеләр һаман да ҡайтманылар... береһе лә юҡ: Шәйхетдинов та, Кашаев та, Әбүбәкиров та — береһе лә күренмәй...

— «Неужели былар икешәр смена рәттән эшләргә ҡалғандар...» тип уйланы Шакиров.

Скважинаның төбөн ҡырҡып, ашап, породаларҙы ваҡлап ташлай торған долотолар — «балыҡ ҡойроҡтары»,— бер нисә метр үткәс, шундай ныҡ ашалалар— уларҙы тағы ла мастерскойға, электросваркаға ебәреп «заправить» иттерергә, тағы ла өҫтәп ғәҙәттәге хәленә ҡайтарырға тура килә. Электросварщиктар ҡаты металл — «вакал» ды иретеп, долотоның түбәнге башын үҫтерәләр, яңынан эшләйҙәр. Электросварщиктар өсөн эш етерлек. Эшләргә генә өлгөр.

Тик бына эштең иң ҡыҙыу ваҡытында «Линкольн» машиналары эштән баш тарттылар. Береһен төҙәтеп ҡуйғайнылар — икенсеһенең моторы «стучать» итә башланы. Машиналар эшләмәгәс, бер нәмә лә эшләп булмай инде. Улар бит «ток» биреп торалар.

Бригадир Дарвин оҙаҡ һөйләп торманы.

— Бик тығыҙ ваҡыт, иптәштәр,— тине ул,— әгәр ҙә беҙ машиналарҙы тиҙ генә төҙәтеп алмаһаҡ — крышка! Долотолар көтөп яталар. Тағы ла план өҙөләсәк — факт! Кем төнөн эшләргә риза?

Комсомолец сварщиктар быны үҙҙәре лә беләләр, тик бына асыҡтырған, эстә бүреләр олой...

— Ә, ну егеттәр! Һуңғараҡ барып ашарбыҙ, давай бергәләп һүтеп ташлайбыҙ...

— Ашағас, тағы ла килербеҙ...

— Әйҙә башланыҡ!

Беренсе смена менән икенсе смена бергә ҡушылды. Сварщиктар трактор кеүек «Линкольн»де әйләнеп алып, һәр береһе бер бүлеккә тотондо. Афтолды ағыҙып, катерҙы айырып алдылар. Радиатор һүтеп ташланды.

Мотор түбәһен һүттеләр, цилиндрҙар эсендә поршендәрҙең баштары күренде...

Сварщиктар унын ингәнен һиҙмәй ҙә ҡалдылар. Тик ҡарағыҙ әле, минең Әхмәтгәрәйҙе күрмәнегеҙме? тигән тауышҡа боролоп ҡараһалар, ишек төбөндә шәлгә төрөнгән, ҡарға һырыҡҡан бер ҡатынды күрҙеләр.

Комсомолецтар бер-береһенә ҡараштылар.

— Юҡ, апай, беҙҙә ундай кеше юҡ...

— Ҡайҙа эшләй?

— Фамилияһы нисек?

Был — Бибикамал еңгә ине. Ул нишләргә белмәй, быйма кейгән аяҡтарын һуҡҡылап, торҙо ла:

— Буровойҙа эшләй... ошонда йөрөй, йомош менән был яҡҡа сыҡҡан тигәйнеләр. Фамилияһын Йәнбулатов тип йөрөтә...

Комсомолецтар йылмайыштылар:

— Ә!.. Гәрәй ағайҙы әйтәһең... юҡ, юҡ күренмәй.

— Һин ҡара, еңгә, ҡыҙҙар менән әйттереп йөрөмәһен, кисә генә әле посёлка буйлап бер мәрйә менән китеп бара ине...

— Шаярмағыҙ, егеттәр, Гәрәй ағай хәҙер курста ултыра торғандыр. Контора йортона барып ҡара еңгә — бына яҡын ғына. Беҙҙән сыҡҡас та, туп-тура бар, тәҙрәһенән ҡараһаң — күрерһең.

«Ҡыҙҙар менән әйттереп йөрөмәһен» тигән һүҙ Бибикамал еңгәнең тәнен сымырҙатып ебәрҙе. Ул үҙе бит ул турала күп уйлағаны бар! Бына бөтә нефть промыслаһын бөтөрөп эҙләп йөрөгәндә быңдай уй унын башына бер генә килмәне.

— Ҡәҙерле ҡунаҡтар килгән. Өс-дүрт йылға бер генә киләләр бит улар. Шайтан белһен, ҡайҙа йөрөй... Бына өсөнсө көн инде ярты төндәрҙә генә ҡайта. Әллә бөтөнләй өйҙән биҙҙе инде. Әллә ысынлап та береһе башын әйләндерҙеме икән? »

Бибикамал еңгә, ҡырҡ тапҡыр ҡабатлаған уйҙарын тағы ла ҡабатлап, яҡты уттар менән теҙелеп күренгән тәҙрәләргә ҡарай барҙы. Ләкин туңған

тәҙрәләр бүлмә эсендәге бер генә нәмәне лә күрһәтмәнеләр. Әйтерһең, тәҙрәләр, эстәге кешеләрҙең, эстә нәмә эшләгәнен тышҡа күрһәтмәҫ өсөн, юрый туңғандар, әйтерһең, улар Гәрәйҙе юрый уның күҙенән йәшереп торалар...

Ул, тышҡы ишекте асып, коридорға инде һәм кешеләр тауышы килгән бүлмәнең ишеген тартып ебәрҙе.

Бүлмә эсендә унлап кеше ҙур ғына ике өҫтәлде әйләнеп ултырғандар, һәр береһенең алдында ағарып ҡағыҙҙар ята.

Бүлмәнең түрендә ҙур ғына таҡта тора... Бер өҫтәлдең таҡтаға яҡын урынында Гәрәй Йәнбулатов ҡулындағы ҡәләм менән алдындағы ҡағыҙға нәмәлер яҙа һәм һөйләй. Йәш кенә бер рус ҡыҙы яурынына ҡулын ҡуйған да, йылмайып:

— Вот — вот, иптәш Йәнбулатов, бик дөрөҫ! Молодец! — ти. Башҡалар ҙа уларға ҡарағандар. Уларҙың береһе лә Бибикамал еңгәнең ишек асып ингәнен һиҙмәне. Теге ҡыҙ ҡара таҡтаға барҙы ла аҡбур менән нәмәлер яҙырға тотондо һәм үҙе һөйләүендә дауам итте.

— Шулай итеп, процент тигән һүҙ — йөҙҙән бер тигән һүҙ була, иптәштәр...

Бибикамал еңгә был һүҙҙәрҙе аңламаны һәм уларға иғтибар итмәне. Нишләргә лә, нәмә әйтергә лә белмәне. Бер аҙҙан һуң ғына ҡалтыранған тауыш менән:

— Әхмәтгәрәй, әйҙә ҡайт,— тине. Ул үҙ тауышының бик ҡысҡырып әйтелгәнен үҙе һиҙмәй ҡалды. Бүлмәлә булғандар барыһы ла ишек яғына боролоп ҡаранылар.

— Ә... Хәҙер, бисәкәй, бына хәҙер бөтә — һин аҙ ғына көтөп тор,— тине Гәрәй.

Теге ҡара таҡтаға яҙып маташҡан ҡыҙ ҙа йылмайып уға ҡарап тора.

— Һинең ҡатыныңмы әллә, иптәш Йәнбулатов?

Бибикамал еңгә тиҙ генә боролоп шәп-шәп атлап үҙҙәренең ауылы яғына китте, уның башындағы уйҙар буталдылар.

— «Мин уны төн буйы эҙләп йөрөйөм, ҡунаҡтар көн буйы, кис буйы көтөп ултыралар... Ә ул мәрйә һүҙен тыңлап ултыра. Ниндәй көлөшөп һөйләшәләр бит! Бөтөнләй биҙгән икән өйөнән...

Мәрйәһе лә килешкән — оялмай ҙа, рәхәтләнеп көлөп ҡарап тора.

Ҡайтырһың әле. Ҡунаҡтар алдында хур итермен. Төндәр буйы мәрйәләр менән йөрөйһөң икән, шул икән коммунислығың тип әйтермен... Урыҫ халҡынан изгелек көтөргә яраймы һуң... Урыҫтар менән аралашты, улар менән ултырҙаш булды — юлдан яҙғанын көт тә тор...»

Бибикамал еңгәнең уйҙары шулай булдылар. Ләкин өйгә ҡайтыу менән, ул ҡунаҡтар алдында үҙенең әле генә юлда уйлап ҡайтҡан уйҙарын белдермәне.

— Хәҙер ҡайта... шул нефть тигәндәренә башы менән сумды инде...

Гәрәй ҡайтҡас та, ҡунаҡтар алдында тауыш күтәрмәҫ өсөн, Бибикамал еңгә асыулы һүҙҙәрен әйтмәне. «Ваҡыты килеп еткәс, әйтермен әле» тип эсендә һаҡлап ҡалдырҙы, һәм теге рус ҡыҙына булған көнләшеү хисе лә уның күңелендә ныҡ урынлашып ҡалды...

Лиза Малахова сварка цехына барып ингәс, оҙаҡ ҡына ваҡыт, эшләүселәргә ҡарап торҙо. «Линкольн» частары тирәһендә ҡайнашҡан сварщиктар үҙ-ара бер нәмә лә һөйләшмәйҙәр. Һәр кем үҙ алдындағы эште генә беләө. Бары тимер частарҙың ҡайһы ваҡыт бер-береһенә бәрелгәндә сыҡҡан сыңғылдау тауыштары һәм эшселәрҙең ҡайһы береһенең берәй ауыр нәмәне ҡулына алғанда сыҡҡан тәрән тын алыуы ғына ишетелә.

— Һаумы, иптәштәр! — тине Малахова. Эшселәр эштән айырылмай ғына боролоп ҡаранылар, йылмайып баш һелктеләр. Ләкин, бер кем дә бер яуап та бирмәне. Был тын һәм хеҙмәт менән генә һуғарылған һауа эсендә Малахова үҙенең тауышын урынһыҙ итеп һиҙҙе.

— Ну, иптәштәр,— тине бригадир,— ҡайтып ял итергә кәрәк, хәҙер сәғәт ике тулды...

Сварщиктар, эштән туҡтап, майлы ҡулдарын һөртә- һөртә, бергә йыйылдылар һәм тәмәке урарға тотондолар. Шунда ғына улар Малахованы күргән кеүек булдылар.

— Ә, иптәш Малахова, хәйерле кис!

— Нишләп һин былай бик һуңлап йөрөйһөң? Етмәһә, бер үҙең генә.

— Теге, кистән килгән еңгә кеүек был да үҙенең Әхмәтгәрәйен эҙләп йөрөймө әллә...

— Иртәгә иртүк, иптәштәр, үҙегеҙҙең цех тураһында стена газетаһына хәбәр яҙып бирегеҙ,— тине Малахова,— газета сәғәт 12-гә өлгөрөргә тейеш. Мин шуны яҙып ултырҙым, тик һеҙҙең өсөн генә урын ҡалды. Бригада булып, бер нисә иптәш яҙығыҙ...

— Ярай, ярай, яҙырбыҙ.

— Сварка цехындағы комсомолецтар мах бирмәйҙәр тип, хәҙер үк хәбәрҙең башын яҙып ҡуя алаһың..

Малахова сварщик Ғәлиәкбәрев менән китте. Улар артынан кемдер ҡысҡырып ҡалды.

— Ғәлиәкбәр былай ҙа арыған ул, Лиза, һин бөтөнләй хәлдән тайҙырып ташлама!

Ғәлиәкбәревтең арығанлығы ысынлап та беленеп тора. Ул күп һөйләшмәй, һүҙҙәре лә иғтибарһыҙ ғына әйтеләләр. Улар оҙаҡ ҡына һөйләшмәй барҙылар. Промысла төнгө тынлыҡҡа төрөнгән, тик, тегендә лә бында электр фонарҙары тауыш-тынһыҙ, ләкин әллә ҡайҙан ҡысҡырып торған аҡһыл күк яҡты менән поста торалар.

Лиза Малахова һүҙ башларға, күп итеп һөйләшергә тырыша. Уның эргәһендә генә барған сварщик егеттең тән йылыһы Лизаға бәрелеп үк тора. Лиза тынысһыҙлана. Ләкин ниндәй һүҙҙәр әйтергә белмәй. Аҙаҡтан уның кемгәлер, нәмәгәлер асыуы килгән кеүек була. Лиза үҙенең нәмә әйткәнен һиҙмәй ҙә ҡала:

— Ташла әле шул ғәҙәтеңде... Мин әле комсо-коллектив бүлмәһендә, бер яҡтан, стена газетаһы яҙып ултырһам, икенсенән, һинең менән осрашыу

өсөн, һинең эштән сыҡҡаныңды көтөп ултырҙым. Ә һин, исмаһам, әйбәтләп һөйләшмәйһең дә.

Ғәлиәкбәрев һаман да уға табан ҡарамай — алдына ҡараған да, атлай ҙа атлай. Уның тауышы аҡрын сыға, ләкин Лизаға шундай яҡын тойола был тауыш:

— Һин тынысһыҙланма әле, Лиза. Һүҙһеҙ ҙә бик һәйбәт бит, унан һуң, асыҡ әйтергә кәрәк — мин бөгөн бик арығанмын...

Лизаның настроениеһын үҙгәртә торған һүҙҙәр былар. Лиза үҙенең әле генә әйтелгән һүҙҙәрен уйлай ҙа — үҙен әрләй: «Дура! Улар рәттән егерме сәғәт эшләгәндәр, штурм алып баралар... Ә мин, комсомол коллективы бюроһы ағзаһы, уларҙың етәксеһенә нәмә һөйләп барам. Ах, дура, дура...»

Комсомолецтар араһында Лиза Малахова ҙур авторитетлы кеше. Уның һүҙҙәре үтемле булалар. Бер генә һүҙен дә ул бушҡа һөйләргә яратмай. Комсо-коллектив секретары...

— «Малахова алтын эшсе ул...» — ти уның тураһында һәм, бер ваҡытта ла, комсомол эшендәге ниндәй генә саралар булмаһын, Лиза менән кәңәшләшмәй эшләмәй.

Эшселәр барагына етер саҡта, Малахова төрлө майҙарға буялып бөткән, бензин еҫе килеп торған сварщиктың көслө тәнен ҡосаҡлап алды ла:

— Һин үпкәләмә... Әллә нисек әйтелде инде, — тине.

— «Линкольн»дәр төҙәтелеп бөткәс, Лизка! — тине комсомолец Ғәлиәкбәрев, ҡыҙҙың артынан йылмайып ҡысҡырып ҡалды һәм күңеленән «яратам үҙеңде, Лиза. Көнө-төнө саба, эшләмәгән эше юҡ. Китапханала китап тарата. Собраниелар үткәрә, газета сығара. Нәмәләр генә эшләмәй? «Һинең эштән сыҡҡаныңды көтөп ултырҙым...» ти. Их, Лизочка! Йәшәрбеҙ беҙ, ну йәшәрбеҙ!..» тип уйлай. Бер генә минутҡа ул бөтә арығанлығын онота. Уйҙар бер-бер артлы баш тирәләй йөрөй башлайҙар. Йоҡо ҡайҙалыр ҡаса — уның күҙҙәре ҙур асылып тирә-яҡҡа ҡарайҙар. Ҡышҡы төн уртаһының ҡараңғылығы аша тирә-яҡта электр фонарҙары йылтырайҙар,

буровой вышкалары, ундағы уттар бик алыҫтарҙан да күренәләр — әйтерһең, улар хәҙер генә комсомолка менән комсомолецтың ҡосаҡлашып торғандарын күргәндәр ҙә шаярып күҙ ҡыҫышалар...

Дүрт көндән һуң «Башҡортостан вышкаһы» газетаһында шундай хәбәр баҫылды:

«Комсомолецтарҙан торған электросварщиктар бригадаһы беренсе һанлы «Линкольн» машинаһын, көнө-төнө удар эшләп, дүрт көн эсендә төҙәттеләр. Ғәҙәттә был машинаға капиталь ремонт яһау ун бишәр көнгә һуҙыла торғайны. Бында эшләүсе комсомолецтар, ашау, йоҡоларын онотоп, икешәр смена рәттән эшләнеләр.

Электросварщик комсомолецтар — Башҡортостан нефте өсөн көрәштең геройҙары — Кашаев, Әбүбәкиров, Ғәлиәкбәрев, Шәйхетдиновтарҙы бөтә промысла белергә тейеш!»

Лиза Малахова үҙенең Бакуҙа ҡалған иптәш ҡыҙына бындай хат яҙҙы:

— «Валентина! Мин һиңә күптән бирле инде хат яҙғаным юҡ. Бер ҙә ваҡыт булманы шул. Эш шундай күп — муйындан эш! Һин хәҙер ВУЗ-ды бөтә торғанһыңдыр инде. Тимәк, бер нисә йылдан үҙалдыңа инженер булып эшләй башлайһың тигән һүҙ. Мин уҡый алманым инде — үтте бит ваҡыт... Хәҙер бына тормошҡа ла сыҡтым.

Беләһеңме кемгә? Электросваркала эшләүсе бер татар егете. Белеме яҡшы ғына. Мәскәүҙә уҡып ҡайтҡан. Квалификацияһы яҡшы. Мин үҙемде бик бәхетле һанайым. Үҙемде генә түгел, беҙ барыбыҙ ҙа — һин дә, минең Ғәлиәкбәрев тә,— беҙ комсомолецтар, беҙҙең замандың кешеләре барыһы ла бәхетлеләр кеүек тойола миңә...

Мин былай разведканың китапханаһында эшләйем, күп кенә ваҡыт унда үтә. Шунан һуң башҡа эштәр булып тора: комсо-коллектив бюроһында, делегаткалар араһында эш алып барырға, комсомолецтар стена газетаһы сығарырға кәрәк. Бында «Башкирская вышка» тигән баҫма газета сыға. Шунда хәбәрсе булып эшләйем. Ух, эш күп! Ләкин, бер ҡайғым бар, Валечка. Бер кемгә лә әйткәнем юҡ. Һиңә лә әйтергә оялам, һин әле ҡыҙ

кеше. Шулай ҙа ғәйепкә алма — әйтәйем инде: балам булғас, нишләрмен икән,— тип ҡайғырам. Хәҙер өс айлыҡ инде... Неужели бөтә эштән айырылырмын? Гел генә өйҙә ятырға тура килерме?

Ярай, рәте табылыр әле. Ҡайғырмаҫка кәрәк — шулаймы?

Бала тигәс, иҫкә төштө әле. Мин ошо арала ғына бынан 5—6 километр бер ауылда балалар яслеһе ойоштторҙом. Шунда бер башҡорт эшсеһенең ҡатыны менән история булды, бик ҡыҙыҡ эш ул. Мин һиңә һөйләйем әле уны.

Бында Йәнбулатов тигән бер бурильщик бар, бик һәйбәт кеше. Элекке партизан. Үҙе эшкә шундай тиҙ өйрәнде. Хәҙер оҙаҡламай үҙен мастерлыҡҡа сығарырға торалар. 3—4 йыл эсендә әллә ни тиклем белем алды. Ну вот. Шуның бисәһе бар, күптән түгел генә шуларға барып ингәйнем, шул бисә минең менән һөйләшмәй ҙә бит! Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары менән минең дуҫлыҡ ҙур — уларҙың телдәрен дә өйрәнеп алдым, улар бик яраталар мине. Ә был бисә һөйләшмәй ҙә, нитмәй ҙә.

— Апай, бәләкәй балаңды яслегә бирергә кәрәк, үҙең берәй төрлө эшкә инерһең,— мин әйтәм.

Тәүҙә бер нәмә лә өндәшмәй торҙо ла һуңынан өйҙән үк ҡыуа башланы.

— Хәҙер сығып кит, күҙемә күренмә! — ти.

Мин аптырап ҡалдым. Минең дә асыу килде килеүен, шулай ҙа сығып киттем. Икенсе көндө тағы ла барҙым, күп кенә һөйләнем. Күптән түгел генә бер татар егетенә тормошҡа сыҡҡанымды ғына әйткәйнем — бисә асылып уҡ китте, һөйләшә лә башланы.

Балаһын яслегә алдыҡ, бер ҙә ҡарамаған икән — бысранып, тәндәре боҙолоп бөткән. Яслелә был баланы бер нисә көн үҙем ҡараным. Бала таҙарып, матурланып китте.

Был ҡатын минән ирей көнләшеп йөрөгән... Ире Йәнбулатов миндә курста уҡый ине. Бер ваҡытты шулай, мин уҡытҡан ваҡытта, килгән дә ҡарап торған. Нәҡ минең Йәнбулатовтың яурынына ҡулымды ҡуйып торған ваҡыт

тура килгән икән. Көнләшкән бит, бахырың! Иренә лә бик оҙаҡ ваҡыт асыуланып йөрөгән, аҙаҡтан былярҙы үҙе һөйләне.

Хәҙер инде ул ҡатын буровойҙа кочегар ярҙамсыһы булып эшләй, ликбезға йөрөй, собраниеларға барғылаштыра. Беҙ уның менән бик дуҫ булып йөрөйбөҙ...

Их ҡыҙыҡ та беҙҙең тормош, Валечка.

Беҙ Бакуҙы ташлап бында килгәнгә оҙаҡламай дүрт йыл тула. Беҙ килгәндә бында бер нәмә лә юҡ ине. Ҙур ғына йылғаның уң яғындағы яр башында бер нисә генә өйлө утарҙар бар ине. Ә йылға буйының яландары буш — бер генә нәмә лә юҡ ине. Хәҙер инде ул урындарҙы танырлыҡ та түгел. Тирә-яҡта буровойҙар... теге утар урынында ҙур эшсе посёлкаһы... мастерской, электр станцияһы, котельный цех, йылға аръяғында тағы ла ҙур электр станцияһы һалалар.

Тәүҙә ҡыйын кеүек ине. Шау-шыулы Бакуҙан ҡапыл ғына бындағы тынлыҡҡа килеп ингәс, бер аҙ ваҡытҡа күңелһеҙ генә булды, йәшәй биргәс, өйрәндек тағы. Хәҙер инде барыбер. Баку бик һирәк иҫкә төшә, иптәштәрҙе уйлайһың...

Атайымды бик яраталар, ул хәҙер бындағы башҡорт халҡынан бер нисә эшсе әҙерләп сығарҙы. Партком бюроһында ағза булып тора. Атайым минең тормошҡа сығыуға бик риза булып етмәне-етеүен.

«Уҡырға кәрәк ине» ти.

Шулай ҙа бик асыҡ әйтмәне, уҡырға теләк көсәйһә, былай ҙа китеп булыр әле.

Шулай, дуҫҡай, мин инде ысын Башкирия кешеһе булып барам.

Шулай ҙа Бакуҙы онотоп булмай әле. Мәктәптә уҡып йөрөгән ваҡыттар, комсомолдағы иптәштәр, «яратышып» йөрөүҙәр — улар бары ла хәтерҙә һаҡланалар, йәш ваҡыттағы эштәрҙең күбеһе хәҙер аҡылһыҙлыҡ булып күренә. Шулай ҙа үҙенә күрә бер тәме бар йәшлектең, Валечка! Шуға күрә һин һәм башҡа иптәштәрҙе, Баку промыслаларын, тоҙло һыулы Каспиҙы онота алмайым әле мин.

Хат яҙ. Коммунистарса сәләм менән

Лиза Малахова».

Ишембай яландары, Ағиҙелдең уң яғындағы текә ярҙары һәм Иҙелдең һалҡын тулҡындары өҫтөндә октябрь айы төнөнөң йондоҙҙары йымылданылар, һирәк һәм мамыҡ кеүек еңел болоттар араһынан бер йәшеренеп, бер күренеп, төндөң үҙе кеүек үк һалҡын ай бара.

Ә ерҙә, эшсе посёлканан алыҫ түгел бейек, текә яр башындағы скважинанан, вышканы һелкетеп нефть фонтаны бәрә, фонтан геүләй, үкерә. Ер эсенең йәшерен көстәре шыйыҡ, еңел массаны юғарыға аталар.

Нефть ҡотороп тышҡа ынтыла. Фонтан буровой вышкаһының түбә таҡталарын вата, ҡыра. Ә юғарыла инде нефть, ҡуйы, ҡара болот кеүек, тирә-яҡҡа тарала. Вышка тирәһендә нефть «күлдәре» барлыҡҡа килә. Нефть ағымдары, айҙың тоноҡ яҡтыһында йылтырап, шундағы тәрән соҡорға, унан Ағиҙелгә ағалар.

Ә был соҡор төбөндә кешеләр тауыш-тынһыҙ, бер нәмәгә лә, фонтан, ямғырына ла иғтибар итмәй быуа яһайҙар. Сөнки нефтте Ағиҙелгә ағыҙып әрәм итергә ярамай.

Тик вахталағы кочегар Рамазан ҡарт ҡына шунда, буровойға яҡын ғына кочегарка эргәһендә һис хәрәкәтһеҙ баҫып тора һәм ҡотороп аҡҡан фонтанды күҙәтә.

— Рамазан бабай!..

Уға  кочегарканан ҡысҡырҙылар.

Ул теләр-теләмәҫ кенә кочегаркаға, топкаларында геүләп нефть янған ҙур ҡаҙандар эргәһенә, килде. Уның оҙон ҡаштары аҫтында кескәй генә күҙҙәре әллә топкаларҙағы уттан, әллә үҙенә генә билдәле булған эске уйҙарҙан ялҡынланалар.

Кочегарҙың ярҙамсыһы Васька һораны:

— Рамазан бабам, нишләйбеҙ, ҡаҙандарҙы һүндерәбеҙме? Хәҙер бит инде быраулмабыҙ...

— Юҡ әле. Бензин заводына һыу качать итергә кәрәк. Улар һыуҙы ҡайҙан алырҙар. Ә аҙыраҡ һүндерергә ярай...

Ҡарттың яуабы уйсан ине.

— Бынан 15 йыл элек бына ошо яр башында минең улымды аттылар... — тине ҡарт. Ҡапыл ғына бер нәмәгә лә бәйләнмәй әйтелгән был һүҙгә комсомолец Васька аптырап ҡалды.

Күрәһең, ҡарт ҡотороноп шаулаған фонтан эргәһендә тыуған уйҙарын дауам итеп әйткәндер... Васька һораны.

— Кем үлтерҙе? Нәмә өсөн?

Рус телен ватып-ҡырып Рамазан ҡарт һүҙендә дауам итте.

— Кем икәнен асыҡ белмәйем. Әллә колчаксылар, әллә чехтар ине шунда. Ну аҡтар ине инде. Минең улым бына һинең кеүек үк йәш — уңған ине. Ҡыҙылдарҙа добровольный булып хеҙмәт итте. Хатта, бер отряд менән командовать итә ине...

Ә был ваҡытта скважиналарҙа фонтан тынды. Төнгө, күҙгә һалҡын тынлыҡта мөһабәт ҡарайып, яңы ғына нефткә мансылған вышка тора. Әйтерһең, вышка хәҙерге хәленән бик ҡәнәғәт, әйтерһең, ул үҙ бурысын үтәү шатлығынан эреләнә.

Кочегаркала ҙур «робей» ҡаҙандарында геүләп нефть яна. Ҙур ҡаҙан аҫтында парҙар шаулайҙар. Кочегар ҡарттың ҡуйы йөн менән ҡапланған йөҙө уйсан һәм хәрәкәтһеҙ. Тик күҙҙәре генә йылтырайҙар һәм ул башланған һүҙен дауам итә:

— Беҙҙең ерҙәребеҙ беҙҙең ҡандарыбыҙға мансылған. Кемдәр генә бында булманы Салауат батыр, Пугачев, Ҡыҙыл Армия...

Кем белһен, бына был фонтан, был нефть шул отрядтар, минең улымдың ҡандары менән аралашҡандыр... Ә минең улымды аҡтар, дөрөҫ, бына ошонда аттылар. Соҡор аръяғына килеп үҙем ҡарап торҙом Улар барыһы биш кеше ине. Уларҙы, арҡалары менән Ағиҙел яғына ҡуйып, ярҙың ситенә генә баҫтырҙылар Мылтыҡ залптарынан һуң, улар артҡа, Ағиҙелгә, ауҙылар... Һәр төндә бында беҙҙекеләрҙе килтереп ата торғайнылар.

Бер нисә минуттан һуң, фонтан тағы ла шауланы, тағы ла геүләй башланы.

Ҡарт һәм комсомолец, топкаларға нефть биреүҙе регулярлаштырып, икәүһе бергә кочегарканан сыҡтылар. Ҡарт үҙенең һаҡаллы, йыйырсыҡлы бөтә йөҙө менән йылмая ине.

Ул ҡапыл ғына ҡысҡырып ебәрҙе:

— Шаула-геүлә, фонтан, нефть күберәк булһын!..

Соҡор эсенән кешеләр күтәрелделәр.

— Быуа әҙер!

— Хәҙер инде нефть Иҙелгә аҡмаҫ!

Кешеләргә был ҡоторонған фонтанды күреү шатлыҡ ине. Төрлө ауырлыҡтарҙы, ҡыштың һалҡындарын, ҡалын ер ҡатламдарының ҡаршылығын еңеп, улар ошо нефть өсөн көрәшәләр. Йылға аръяғындағы яландарға, көнсығыш яҡтағы тауҙар күләгәләренә көҙҙөң һалҡын, тын төнө ятты. Тауҙар араһында далаларҙағы ҙур курган кеүек «Тора-тау» айырылып- айырылып күренә.

Ләкин промысланың өҙлөкһөҙ шаулауы, гөрөлдәүе, унарлаған буровойҙарҙа роторҙарҙың тимер тауыш менән әйләнеүҙәре, пар сүкештәрҙең көслө бәрелештәре — моторҙарҙың двигателдәре геүләүе, эшләгән парҙарҙың шаулауы — боронғо тынлыҡты емерә, бөтә тирә-яҡты яңғырата...

Йымылдаған йондоҙҙар һәм айҙың һалҡын нурҙары менән шаярышып посёлкала һәм буровой вышкаларҙа электр фонарҙары яналар.

Буровой вышкаһы түбәндән юғарыға тиклем фонарҙар менән биҙәнеп, төндәрен гигант карапты хәтерләтә. Әйтерһең, 1917 йылдың октябрь төнөндә мөһабәт «Аврора» Неваның һалҡын тулҡындарында тора.

Төн буйына нығытылған быуа, икенсе көндө иртәнсәк, көслө нефть ағымдарын тота алмай йырылды Нефть тағы ла Ағиҙелгә аға башланы. Кочегар һәм уның ярҙамсыһы, вахта алмашынғас, ҡайтып китмәнеләр, һиғеҙ

сәғәт буйына арығанлыҡты һәм йоҡо килеүен еңеп, улар ҡулдарына балта, көрәк алдылар.

Өсөнсө вахтанан сыҡҡан кешеләр өйҙәренә таралалар.

Фонтан бәргән буровойҙың мастеры, бурильщиктар, кочегарҙар, вахтанан ҡайтып барыусы эшселәрҙе саҡыралар.

— Иптәштәр, ярҙамға килегеҙ!

— Нефть Иҙелгә китә!

Ҡайһы берәүҙәр ишетмәгәнгә һалышып атлай бирәләр. Икенселәре туҡтайҙар. Соҡорға төшәләр, эшкә тотоналар.

Быуала эш бөтөүгә Рамазан ҡарттың хәрәкәтсән, күп һөйләүсән ҡарсығы килде.

— Икенсе көн башланды бит инде, ә ул һаман да әле шунда соҡоноп тора...—Ҡарсыҡ кочегарҙы әрләргә тотондо,— мин инде был, ҡайҙа булһа ла эсеп ята торғандыр, тип уйлағайным.

Ҡарттың йөҙө тирләгән һәм йылмайыулы ине.

— Тиле, ниндәй эсеү булһын, ти ул. Беҙҙең скважинала фонтан бәрә. Беҙҙең ҡаныбыҙ Иҙелгә аға. Ә һин...

Ҡарсыҡ уны аңламай ине. Бергәләп ҡайтып киттеләр. Рамазан ҡарттың удар эшенә күптәр ғәжәпләнделәр. Ул һәр ваҡыт өйгә ҡайтырға ғына тырыша торғайны, һигеҙ сәғәттән артыҡ бер ваҡытта ла буровойҙа ҡалмай ине. Үҙгәрҙе бит ҡарт. Ҡарттарҙан алда барған комсомолец Васька артҡа боролдо:

— Бабай,— тине ул,— һинең улыңдың ҡаны бушҡа китмәгән. Нефть бар. Тимер юлы һалына башланы, байлыҡ буласаҡ, яңы ҡала, ҙур өйҙәрҙә йәшәйәсәкбеҙ!

Ҡарт бер нәмә лә өндәшмәй йылмайҙы. Ул артҡа боролоп ҡараны. Ағиҙелдең текә ярында, бынан 15 йыл элек Октябрь өсөн көрәшселәрҙе аҡ бандалар атҡан урында, мөһабәт буровой вышкаһы үҙенең яңы, ҡара кейемендә мөһабәт ҡиәфәт менән күккә күтәрелеп тора ине.

Ишембай яландарында быңдай вышкалар күптәр улар хәҙер.

Быға тиклем күрелмәгән ҙур промыслалар үҫә. Яңы кешеләр үҫәләр...

Советтар иленең киң яландарында, совхоз, колхоз баҫыуҙарында күп, бик күп тракторҙар, ҙур, ҙур һабандар, тырмалар, сәскестәрҙе һөйрәтеп социализм игендәрен сәсәләр, йәки ҙур һәм мөһабәт комбайндар тағып межаһыҙ баҫыуҙарҙа шаулап иген йыйнайҙар.

Бына был тракторҙар кәрәсин һәм бензин «яғып» йөрөйҙәр.

Йәки советтар иленең диңгеҙҙәрендә, йылғаларында ҙур-ҙур пароходтар, йөҙәрләгән тонна тауар һәм кешеләр тейәп, көслө тулҡындарҙы яралар... Диңгеҙҙәрҙең, йылғаларҙың береһенән икенсеһенә, бер ситенән икенсе ситенә сығалар. Тирә-яҡҡа пушка күҙҙәре менән тишеп ҡарап торған ҙур дредноут, крейсерҙар һәм башҡа һуғыш караптары советтар иленең сиктәрен империалистарҙың һөжүмдәренән һаҡлайҙар. Ә бит был пароходтар барыһы ла мазут яғып йөрөйҙәр. Хатта сит илдәрҙе, капитал илдәрен әйләндергән ҙур океандарға ла сығалар беҙҙең пароходтар. Улар тауар ташыйҙар. Уларҙың бейек мачталарында ирекле советтар иленең ҡыҙыл флагы, елберҙәп, сит ил пролетариатының капиталға ҡаршы көрәшендә ныҡлы таянысы бар икәнен хәтерләтә .

Йәки ил өҫтөндә, үҙҙәренең ҡанаттарындағы ҡыҙыл йондоҙҙары менән ҡояш нурҙарына йылтырап, илдең бер сигенән икенсе сигенә осоп йөрөй торған аэропландар... Улар, сәғәтенә бишәр йөҙ километр осоп, почта йөрөтәләр һәм илдең сиктәрен һаҡлайҙар.

Ә бит аэропландар бензин яғып осалар.

Ҡала урамдарында, фабрика-заводтарҙа, МТС һәм совхоздарҙа эреле-ваҡлы автомобилдәр ауыр йөктәр, кешеләр тейәп бер урындан икенсе урынға йүгерәләр — автомобилдәр ҙә бензин көсө менән йөрөйҙәр.

Ҙур-ҙур заводтарҙың, фабрикаларҙың көслө двигателдәрен мазут яғып хәрәкәткә килтерәләр

Ә бензин, кәрәсин, мазут — улар бөтәһе лә нефттән эшләнәләр. Улар ғына түгел, нефттән күп нәмә эшләнә: машина майы, цилиндр майы,

вазелин — нәмәләр генә эшләнмәй нефттән. Нефтте бит «ҡара алтын» тип юҡҡа ғына атамағандар...

Беҙҙең советтар иле нефткә бай ил. Донъя йөҙөндә беҙҙең кеүек нефть запастары менән бай ил юҡ. Илебеҙҙең көньяғында Каспи диңгеҙе буйында атаҡлы Апшерон ярымутрауын, ундағы Баку промыслаларын һәм Кавказдағы Грозный нефть ятҡылыҡтарын бөтә донъя белә. Нефть табыуҙа беренсе биш йыллыҡ планы ике йыл ярымда үтәлде. Йылдан-йыл беҙҙең нефть промышленносы көсәйә. Вышкалар артынан вышкалар үҫәләр. Фонтандар артынан фонтандар бәрәләр. Лок-батан промыслаһының фонтандары тәүлегенә бер нисә ун мең тонна нефть бирәләр ..

Уға ҡарамаҫтан, ер аҫтында ятҡан нефтте өҫкә сығарыу, уны файҙаланыу беҙҙе ҡәнәғәтләндерергә мөмкин түгел. Социализм иленең индустрияһы айҙар, йылдар менән генә түгел, көндәр, сәғәттәр менән үҫә. Береһе артынан береһе трактор, автомобиль гиганттары сафҡа баҫа. Эшләнеп сыҡҡан трактор, автомобилдәрҙең һаны көн һайын үҫә бара. Уларға яғыулыҡ кәрәк — бик күп яғыулыҡ кәрәк беҙҙең илгә. Мазут, кәрәсин, бензин һәм башҡа нефть продукттары күп кәрәк беҙгә...

Ә улар ер аҫтында яталар. Беҙҙең илдең ер аҫтында ҙур нефть запастары ята. Уларҙы файҙаланырға, советтар иленең байлығын арттырғандан-арттырырға, социализм төҙөлөшөн көсәйткәндән-көсәйтергә кәрәк беҙгә...

Ишембай нефтселәре ана шул юлда көрәштеләр. Ҡасандыр бер ваҡытта Ишембай яландарына килеп йөрөгән, капиталист булырға тырышҡан генерал кейәүе геолог Никольский, ҡалын ер ҡатламдары аҫтында ятҡан нефтте бер ваҡыт эшсе синыф үҙе табырға тотонор, эшсе синыфының былдай эшкә көсө, капиталистарға ҡарағанда, һан менән күрһәтә алмаҫлыҡ ҙур булыр, капиталистарҙан башҡа Башҡортостан хеҙмәтсәндәре, рус пролетариаты менән бергәләп, бында ҙур промысла барлыҡҡа килтерерҙәр, тип башына ла килтерә алмағандыр.

Күп Никольскийҙар, хәҙер бындағы хәлдәр тураһында ишетеп, ғәжәпләнеү менән бергә сәстәрен өҙгөләйҙәр.

Ҡасандыр туҡлыҡтарына түҙә алмай, башҡорт старшинаһының һимеҙ, һаҫыҡ тәне еҫенә иҫереп, боҙоҡлоҡ, фәхишәлек эшләп йөрөгән Елена Михайловна кеүек бәндәләр хәҙер капитализм наҙанлығында, хәҙер инде аслыҡтан үҙҙәренең тәнен һатып, сифилис менән серейҙәр...

Шулай кәрәк ине — шулай булды…

Йәнбулат ҡарт улы Әхмәтгәрәй һәм башҡа бик күп миллионлаған Гәрәйҙәр илдәге бөтә байлыҡҡа хужа булдылар. Социализмса хужа булыу өсөн уларға күп баҫҡыстарҙы үтергә, күп ауырлыҡтар менән көрәшергә тура килде. Шулай кәрәк ине — шулай булды.

Разведка, партия ойошмаһының етәкселеге аҫтында, өс-дүрт йыл эсендә ҙур нефть промыслаһы барлыҡҡа килтерҙе.

1930 йылдың көҙөндә генә, ҡышҡы бурандар менән шаулап йәки йәйге ҡояш аҫтында тын ғына, йөҙәр, меңәр йыллыҡ тынлыҡты һаҡлап ултырған Ишембай яландарына 1933 йылдың йәйенә инде бер тиҫтәнән артыҡ буровой вышкалар, баштарын күктәргә күтәреп, киң яландарҙы, тау буйҙарын яңғыраттылар. 1933 йылдың көҙөнә туғыҙ скважина нефть бирҙе. Был скважиналарҙың ҡалын ауыр задвижкаларын асҡанда, көслө фонтандар, сәстәре туҙып, ҡалын һәм ҡарт ер ҡатламдарына ғына хас булған көс менән күкрәп, юғарыға ынтылдылар.

Ишембайҙа нефть табылды. Ләкин Ишембай нефтен Ишембайҙан ситкә сығарырға, Урал-Кузбасс гиганттарына, тракторҙар, автомобилдәргә ағыҙыу өсөн юл кәрәк ине...

Шул уҡ борғоланып аҡҡан Ағиҙел йылғаһы, Ағиҙел буйындағы киң яландар, йәки бейек-бейек тауҙар — улар әле үҙгәрмәгәндәр. Тауҙар, ана шул «Шиған» тауы ла, бер урында торалар. Ағиҙел дә бынан 5—6 йылдар элек аҡҡан урынында аға. Йәй көндәрендә ер йәшәрә, Иҙел алыҫтарҙан уҡ йылтырап ята. Көнсығыштағы алыҫ тауҙар күгәреп күренәләр. Әйтерһең,

тәбиғәт мәңгегә шулай бер үҙгәрешһеҙ торасаҡ, әйтерһең, тәбиғәт өҫтөндә барған үҙгәреште белмәй, белергә лә теләмәй...

Бына мөһабәт «Шиған» тауы — ул күп замандар буйынса инде тирә-яғына тыныс ҡына ҡарап ултыра, йылдар, быуаттар үтәләр, кешеләр алмашыналар. Береһе үлә, икенсеһе тыуа ла үткән быуындарҙың урынын ала. Һәр быуын ниндәйҙер бер эш эшләй – кешеләр тәбиғәт менән көрәшәләр, уны үҙгәртәләр, шулай итеп үҙ тормоштарын үҙгәртәләр — үҙҙәре лә үҙгәрәләр. Ә бейек һәм түңәрәк тау һаман да шул түңәрәк, бейек хәлдә ултыра бирә... Әйтерһең, кешеләрҙә, кешеләрҙең тормоштарында һәм бына был биш йыллыҡтар дәүере кешеләренең эштәрендә тауҙың бер ҡатнашы ла юҡ... Ер планетаһы ғүмере көндәренең береһендә «Шиған» тауы итәгенә кешеләр килделәр һәм улар менән бергә ниндәйҙер машиналар килде. Бер нисә сәғәттән һуң, киң Ағиҙел буйҙарын күкрәтеп «Шиған» тауы итәгендә көслө шартлау яңғыраны.

Быуаттар буйына бер урында ятып ҡатҡан ныҡ һәм ауыр таш ҡатламдары бер секунд эсендә күккә осто.

Ҙур тау үҙенең бөтә барлығы менән һелкенде, таш киҫәктәре, ярылғылап, ватылғылап, түбәнгә, Ағиҙелгә, ҡарай тәгәрәнеләр.

Шул тауҙан алыҫ түгел бер урында ултыртылған бағанаға былдай һүҙҙәр яҙылған таҡта ҡуйылған:

«Тауға ҡарай үтергә ярамай. Ишембай гидроэлектростанцияһы төҙөлөшөнә ангидрит алыу өсөн бында шартлатыуҙар яһала...»

Икенсе биш йыллыҡ йылдарының береһе ине. Өфө — Оренбург тимер юлының Ишембай тармағында «Промысловая» тигән станцияла ҙур составлы тауар поезы Өфө яғына китергә әҙерләнде, беренсе звонок булды.

Станцияға йыйылған халыҡ диңгеҙе хәрәкәткә килде. Кешеләр менән бергә йөҙәрләгән ҡыҙыл әләмдәр, йәйге ҡояш нурҙары аҫтында, тағы ла алһыуланып, өҙләкһеҙ елберҙәнеләр. Партком секретарының:

— Иптәштәр!— Башҡортостан нефтенең һәр бер цистернаһы беҙҙең дошмандар сафына снаряд!— тигән тауышы көслө духовой оркестр

музыкаһына аралашты... Икенсе звонок бирелде, паровоздың свистогы, бөтә тауыштарҙы, шау-шыуҙы күмеп, киң яландарҙы яңғыратты. Поезд ҡуҙғалды.

Составтың ҡойроғонда «служебный» вагонда барған ҡарт мастер Малахов, күптән түгел генә бурильщиктан мастерлыҡҡа күскән Гәрәй Йәнбулатов һәм инженер Присс, тағы ла бер нисә кеше станцияла ҡалғандарға фуражкаларын болғанылар.

Станцияла, уларға яуап биргән кеүек, ҡыҙыл әләмдәр тағы ла көслөрәк елберҙәнеләр.

Поезд үҙенең барыш тиҙлеген ҡыҙыулатҡандан- ҡыҙыулатты. Рельстарҙың тоташҡан урындарында вагон тәгәрмәстәре йышыраҡ тыҡылданылар.

Гәрәй Йәнбулатов, Стәрле станцияһына барып еткәнсе, артҡа, промыслаларға, ҡарап барҙы. Бер нисә минут эсендә ул бөтә үткән ғүмерен уйынан кисерҙе.

— …Беренсе тапҡыр промысла менән Өфө араһында тимер юлы хәрәкәте асылды. Беренсе цистерналар, Ишембай нефте менән тултырылып, Өфөгә ҡарай йүгерҙеләр, ә Гәрәй Йәнбулатов беренсе эшелонды оҙатып Өфөгә бара торған нефтселәр делегацияһының ағзаһы.

Артта “Сталин промыслалары”ның урман кеүек йыш вышкалары, нефть айыра торған ҙур завод, электр станцияһы, мастерской, төҙөү материалдары заводының оҙон торбалары, Ағиҙелдең уң яғындағы Буransы ауылы эргәһендәге тауҙар итәгендә икешәр-өсәр ҡатлы өйҙәрҙән торған социалистик ҡала - улар бөтәһе лә Йәнбулатовҡа бына ошо промысла өсөн көрәш йылдарын айырып ала алмаҫлыҡ булып шул көрәшкә бәйләнгән үҙ тормошон хәтерләтәләр...

Инженер Присс та шул уҡ уйҙарҙы, үтелгән юлдарҙы, бына был промысланы барлыҡҡа килтереү өсөн көрәштең айырым моменттарын уйлай. Ул үҙенең эргәһендә торған Малахов һәм башҡаларға ҡарап һөйләй:

— Хәтереңдәме, Михаил Иванович, 1931 йылдың яҙында, ана шул хәҙерге вышкалар урынында, яҙғы ташҡын эсендә 703-сө буровой эшселәре

үҙ ҡулдары менән инструменттар ташый торғайнылар? Бер нәмә лә юҡ ине бит ул ваҡытта был урындарҙа, ә? Яҙғы ташҡын, стихия, боҙҙар... тирә-яҡта елдәр генә шаулап йөрөй.

Ә хәҙер...

Инженер Гәрәйҙең яурынына ҡулын һала.

— Шулай бит, Йәнбулатов!

Гәрәй инженерға һәм башҡаларға ҡарап йылмая ла башын һелкә. Гәрәйгә «шулай» икәнлеген әйтеп тораһы юҡ. Бөтә нәмә шул турала һөйләп тора.

— Хәтерҙә булмаған ҡайҙа ул!— ти Михаил Иванович Малахов,— был промысланы тыуҙырыуҙың бөтә ҡайғы, шатлыҡтарын һеҙҙең менән беҙ бергәләп баштан кисергәнбеҙ...

Поезд шаулай, тәгәрмәстәр туҡылдайҙар, Ишембайҙағы «Сталин исемендәге нефть промыслаһы»ның нефте, беренсе тапҡыр цистерналарға тейәлеп, Урал-Кузбасс гиганттарына ҡарай юл тотто.

Ә инженер Присс, ҡарт мастер Малахов, йәш башҡорт нефтсеһе мастер Йәнбулатов беренсе эшелонды оҙата баралар.

Артта ҡара вышкалар урманы алыҫланғанлан алыҫлана. Вышкалар, промысла шул яҡтағы офоҡтоң, тауҙарҙың күклегенә инә баралар — поезд алға саба...